✓*Мин күҙһеҙҙе бирҙем ергә -*
*Күҙ ҡәҙерен белһен күҙле.*
*Мил телһеҙҙе бирҙем ергә -*
*Һүҙ ҡәҙерен белһен һүҙле...*
*Рауил Бикбаев. "Өс йөҙ ҙә өс хәҙис".*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15 - 21 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№7 (581)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бәрәкәтле булһын...**
февраль бураны



5-6

**Башҡорт юморы ла...**
һыу һәм һауа һымаҡ кәрәк беҙгә

6

**Тыуған телемдә һөйләшер өсөн...**
бер кемдең дә рөхсәте кәрәкмәй



8-9

**"Чапай мыйығы"на ышанырға...**
халыҡ кара һарыҡ түгел



11

14 **ТВ-программа**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Башҡортостанды танытыусы, көйҙәләндереусе бренд нимә ул?

***Әлфәт ЙОМАҒУЖИН, ЮНЕСКО эштәре буйынса БР комитетының башҡарма директоры:*** Сит илдәр менән әүҙем бәйләнештә эшләргә тура килгәнлектән, республикабыҙ данын донъя аренаһына алып сығыу, уны башҡа илдәр һәм халыҡтарға танытыу йәһәтенән Башҡортостан брендтарын булдырыу бурысы беҙҙең индә лә ятыуын яҡшы аңлайбыҙ һәм был йүнәлештә эш алып барабыҙ. Тәүҙә беҙ Башҡортостанды башҡа төбәктәрҙән айырып торған милли-мәҙәни-этник, тарихи, сәнәғәт, географик һәм башҡа бик күп үҙенсәлектәрҙе барлап сыҡтыҡ. Беҙҙең ҡарашҡа, түбәндәге исемлектә бирелгән ошо билдәләр Башҡортостан бренды тип йөрөтөлөргә һәм мәғлүмәти-реклама йәһәтенән үҫтерелергә, таратылырға тейеш:

- Салауат Юлаев - башҡорт халҡының милли геройы, шулай уҡ "Салауат Юлаев" исемендәге хоккей клубы (КХЛ) атамаһы;
- Салауат Юлаевҡа һәйкәл;
- Башҡорт бал ҡорто һәм башҡорт балы;
- Ҡурай һәм ҡумыҙ - башҡорт халҡының милли музыка ҡоралдары;
- Һабантуй - башҡорт халҡының милли байрамы;
- Янғантау - тау һәм шифахана;
- Башҡорт шихандары - тауҙар;
- Башҡорт халыҡ эпосы "Урал батыр"- донъя халыҡтарының иң боронғо эпостарының береһе;
- Шүлгәнташ мәмерйәһе;
- Башҡорт Уралы - Урал тауҙары; 2011 йылда ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя ҡомартҡылары исемлегенә индерелгән тәбиғәт һәм мәҙәни ҡомартҡыһы (бында шулай уҡ Шүлгәнташ мәмерйәһе менән "Урал батыр" эпосы ла индерелде);
- "Өфө-II" Башҡорт ҡаласығы;
- Башҡорт халыҡ бейеүе "Байыҡ";
- Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академик халыҡ бейеүҙәре ансамбле (2013 йылғы ЮНЕСКО дипломанты);
- Билдәле шәхестәр: Мифтахетдин Аҡмулла, Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева, Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов, Әхмәт Лотфуллин, Жәлил Кейекбаев, Муса Гәрәев, генерал М.М.Шаймуротов, А.Матросов-Ш.Мөхәмәтйәнов, Ғабдрахман Ҡадиров, Ирек Зарипов, С.Т.Аксаков, М.В.Нестеров, Ф.В.Шаляпин, Рудольф Нуриев, Асҡар менән Илдар Абдразаҡовтар.

***Әмир ИШЕМҒОЛОВ, Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан фәнни-тикшереү үҙәгенең генераль директоры, биология фәндәре докторы, профессор, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты:*** Бөтәбеҙгә лә билдәле булыуынса, 2010 йылдың көҙөндә Башҡортостан президенты Р.Хәмитов республикабыҙҙы Рәсәйҙә генә түгел, унан ситтә лә яҡшыраҡ белһендәр өсөн, шулай уҡ Башҡортостан кеүек уникаль республиканы инвесторҙарҙар өсөн ылыҡтырғыс итеү маҡсаттарын күҙҙә тотоп, халҡыбыҙ борондан дан тотҡан

**"башҡорт балы", "бөрйән башҡорт бал ҡорто", "башҡорт аты", "башҡорт ҡымыҙы" брендтарын булдырып, уларға рәсми сертификаттар алырға тигән эшлекле тәҡдим индергәйне.**

Был йәһәттән беҙҙең эш башланып тора ине инде. Мәҫәлән, оҙаҡ ваҡыт тикшеренеүҙәрҙән һуң 2006 йылда башҡорт бал ҡортоноң үҙенә генә хас үҙенсәлектәрен билдәләп сығып, Башҡорт бал ҡортоноң айырым тоҡом булыуы иҫбатланды һәм уға рәсми паспорт алынды. Был документ беҙгә хәҙер бар донъя баҙарына сығыу мөмкинлеге бирҙе. Беҙҙең төплө брендыбыҙ һаналған башҡорт балы күптән инде донъя баҙарын яуланы.

Ә нимәһе менән шундай танылыу алды һуң ул? Был, әлбиттә, уның үҙенә генә хас сифатына, үҙенсәлегенә бәйле. Башҡортостан ерендә бал ҡорттары бал йыя торған 400-ҙән ашыу сәскә һәм үлән бар. Уларҙың күплеге һәм шул күплектең бергә ҡушылыуы башҡорт балына үҙенсәлеке тәм һәм сифат бирә. Был үҙенсәлеккә дымды ла, ҡояш нурҙарын да, һауаны ла индерергә кәрәк. Ваҡытында кисектергеһеҙ саралар күреп, беҙ юғалыу хәүефе алдында торған башҡорт бал ҡорто тоҡомон һаҡлап алып ҡалыуға өлгәштек. Ул ғына ла түгел, башҡорт бал ҡортона яңы маҡсатлы стандарт ҡабул иттек һәм Мәскәү комиссияһы алдында уны айырым тоҡом булараҡ нигеҙләп, документтар менән нығытып ҡуйҙыҡ. Беҙҙең ҡорттар Рәсәйҙә рәсми рәүештә раҫланған берҙән-бер бал ҡорто тоҡомо булып тора. Бөгөн башҡорт бал ҡортон һаҡлау буйынса Нуриман, Архангел, Ғафури, Күгәрсен, Ейәнсура райондарында 5 станция эшләп килә. Беҙҙең умарталыҡтар шулай уҡ Рәсәйҙә төрлө өлкәләрҙән булып тоҡом үрсетеү заводы тигән статус алды.

**Әйткәндәй, Башҡортостаныбыҙҙы сит илдәр һәм төбәктәрҙә хәҙер тап ана шул бренд - башҡорт балы аша ла яҡшы беләләр, сөнки беҙ һәр төрлө халыҡ-ара, Бөтә Рәсәй күргәҙмәләрендә йыш ҡатнашабыҙ. Әле бына башҡорт балы Сочи ҡалаһында ҡышҡы Олимпиадала "ҡатнашып йөрөй": бында 16 мартҡа тиклем утәсәк "Рәсәй һыйыһы" махсус күргәҙмә-йәрминкәлә лә Башҡортостан данын яҡлаясаҡ башҡорт балы!**

**(Дауамы 2-се биттә).**



✓ *Ҡурайыбыҙҙы республикабыҙ символикаһына индереүҙәре дөрөҫ аҙым булды. Ҡурай - ул башҡа бер халыҡта ла булмаған, беҙҙе башҡа илдәргә һәм халыҡтарға танытып тороусы брендтарыбыҙҙың береһе!*



КЕМ АЛЫҠ?

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

Былтыр 2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн баҫмабыҙға яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр ай һайын беҙҙең бүләктәребеҙгә - ҡыҙыҡлы китаптарға лайыҡ булды. Был дәртләндереү сараһын әле лә дауам итәбеҙ. Февралдә 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре", 2 уҡыусыбыҙ - "История башкирского народа" китаптарын алып ҡыуаныр.**

Ә былтыр декабрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙ:

- Баймаҡ районы Ярат ауылынан Гүзәл Монасипова, Ейәнсура районы Байдәүләт ауылынан Филиә Шәрипова - **башҡортса "Ҡөрьән Кәрим"**;

- Ейәнсура районы Сирғол ауылынан Мәрйәм Батталова, Әбйәлил районы Әбделгәҙе ауылынан Мәфрүзә Сафуанова - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**;

- Баймаҡ районы Әхмәр ауылынан Л. Илғыуатова, Күгиҙел ауылынан Нурислам Әминев, Ярат ауылынан Зәлифә Ҡасҡынова, Иглин районы Иглин ауылынан М. Мөъминова, Учалы районы Ҡунаҡбай ауылынан Гөлназ Әхмәҙиева, Мәләүез районы Әбет ауылынан Ю.Иҫәнов, Әбйәлил районы Мәхмүт ауылынан Ишмөхәмәт Ишбулатов, Ишембай районы Хажы ауылынан Рафиҡ Салауатов, Ейәнсура районы Байдәүләт ауылынан Фәнилә Байсурина, Баймаҡ районы Октябрь ауылынан Нуретдин Яҙыҡбаев, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Искәндәров - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**;

- Ғафури районы Красноусол ауылынан Ғәлимйән Ишбулдин, Баймаҡ районы Таулыҡай ауылынан Фәүриә Сағынбаева, Һаҡмар ауылынан З. Арғынбаева, Ишембай районы Аҙнай ауылынан Әбделхәй Кинйәбулатов, Туймазы районы Ҡыҙрас ауылынан Хәниф Әхмәтйәнов, Хәйбулла районы Байғусҡар ауылынан Мөнирә Моратова, Мәмбәт ауылынан Фәрит Мәмбәтов, Ейәнсура районы Байдәүләт ауылынан Н. Шәйәхмәтова, Көнһылыу Ишемйәрова, Бөрйән районы Байназар ауылынан Фәнүзә Аҙанғолова, Әбйәлил районы Асҡар ауылынан Зөһрә Шөгөрова, Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан Ғилмиә Айытҡолова, Баймаҡ районы Билал ауылынан Г. Әлибаева, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан Нурғәле Сафуанов, Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылынан Зөлиә Әлмөхәмәтова, Байдәүләт ауылынан Рәйлә Ғүмәрова, Сажидә Хәйбуллина, Дәүләкән ҡалаһынан Зөләрәм Снигирева, Учалы районы Ҡунаҡбай ауылынан З. Бүләкова - **"Башҡортса дини календарь"**;

Ҡырмыҫҡалы районы Ҡырмыҫҡалы ауылынан А. Ҡусҡарова, Әбйәлил районы Әбйәлил ауылынан С. Дәминдарова, Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан Венера Ғайсина, Илеш районы Үрге Йәркәй ауылынан Ғәлимә Ғәлиева, Әбйәлил районы Елембәт ауылынан Ләлә Хәсәнова, Баймаҡ ҡалаһынан Наилә Раева, Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылынан Гөлкәй Рыҫмөхәмәтова, Йылайыр районы Ҡашҡар ауылынан Альбина Ишморатова, Стәрлебаш районы Ибраҡай ауылынан Гүзәл Сәлихова, Миәкә районы Әбеш ауылынан Гөлнур Ғирфанова, Сирештамаҡ ауылынан Миңзәлә Мөхәмәтйәнова, Өфө ҡалаһынан Ф.Көсөкҡолова, Ейәнсура районы Байдәүләт ауылынан Гөлсөм Бикйәнова, Туймазы ҡалаһынан Р. Ибәтуллина - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ булды.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *Башҡортостанды танытыусы, кәүҙәләндереусе бренд нимә ул?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Юлай ҒӘЙНЕТДИНОВ, ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:*** Ҡурай - башҡорттоң иҫ киткес бай тарихын үҙенә туплаған, үҙенә һыйҙырған бөйөк ҡомартҡы. Ҡурайсы - ул ҡурай моңо аша халҡының тарихын һөйләүсе. Ҡурайсы менән ҡурайҙа уйнаусы араһындағы айырманы элек-электән белгәндәр. Ҡурайсы ул, ҡабатлап әйтәм, иң беренсе нәүбәттә халҡының, көйҙәрҙең тарихын тәрәндән белеүсе, уларҙың төрлө ырыуҙарға хас варианттарын өйрәнеп, йөрәге аша үткәреп башҡарыусы. Ҡайһы бер башҡа халыҡ вәкилдәре, ҡурай беҙҙең музыка ҡоралы, тип, сәхнәгә сығып уйнай, китаптар, белешмәләр сығарып ҡарай ул, ләкин уны нисек кенә үҙләштереп маташмаһындар, барыбер ысынбарлыҡтан бер ҙә ситкә китеп булмауын аңларҙар, сөнки ҡурай үҙенең башҡорт ерлегенән башҡа ҡурай түгел. Ҡурайҙы ерлегенәнән айырһаң, ул биш тишекле һыбыҙғы ғына. "Ерлек" тигән һүҙ үҙенә бик тәрән мәғәнә һыйҙыра. Ерлек - ул беҙҙең тарих, көйҙәребеҙ, ул беҙҙең меңәр йылдар һуҙымында тарихыбыҙҙы, йырҙарыбыҙҙы хәҙергегә килтереп еткергән данлыҡлы ҡурайсылар. Ғөмүмән, халыҡ музыка ҡоралы ерлекһеҙ булмай. Халыҡ музыка ҡоралының үҙ репертуары, башҡарыу традициялары була. Ул быуындар аша тапшырыла. Ҡурайыбыҙҙы һаҡлау үҙебеҙҙе, үҙ асылыбыҙҙы һаҡлауға тиң. Был йәһәттән ҡурайыбыҙҙы республикабыҙ символикаһына индереүҙәре ифрат аҡыллы, дөрөҫ аҙым булды, тип иҫәпләйем. Бына шунан һуң да ҡурайыбыҙҙы башҡа бер халыҡта ла булмаған, беҙҙе башҡа илдәргә һәм халыҡтарға танытып тороусы брендтарыбыҙҙың береһе, тип әйтеп булмаймы ни?!

***Рита АБДРАХМАНОВА, "Пышка" компанияһының техник директоры:*** Беҙҙең башҡорт кухняһы бик бай, туҡлыҡлы һәм сәләмәтлек өсөн файҙалы халыҡ аш-һыуы традицияларына нигеҙләнгән. Уны артабан да камиллаштырырға һәм донъя кимәленә сығарырға була. Мәҫәлән, башҡорт балынан тыш, беҙҙең ҡымыҙыбыҙ ҙа бар бит әле. Уның үҙенсәлеге лә бит тыуған еребеҙҙә үҫкән үләнгә һәм башҡорт тоҡомло атҡа бәйле. Йылҡы, тигәндән, беҙҙең шулай уҡ халыҡта бик популяр ризыҡ төрө - ҡаҙылыҡ һәм йылҡы ите, бишбармаҡ бар. Халҡыбыҙ ғүмер буйы ҡоротлап һурпа эскән һәм быны бик белеп, сәләмәтлекте һаҡлау йәһәтенән дөрөҫ эшләгән, сөнки ҡорот, ҡатыҡ кеүек әскелтем һөт ризыҡтарының майлы ашты эшкәртеүҙә һәм уны һеңдереүҙә организмға ярҙамы бик ҙур. Әйткәндәй, Мәскәүҙән беҙҙең ҡоротто тәмләр өсөн генә килеүселәр барлығын беләм хатта. Һөт ризыҡтары тигәс, тағы ҡыҙыл эремсекте лә телгә алмай булмай. Бынан тыш, ҡаҡланған ҡаҙ, ҡаҡ һораусылар ҙа күп. Өфөлә бер заман буҙа яһап та һатыуға сығара башланылар ҙа, был эш, үкенескә күрә, туҡтап ҡалды. Әйтеүемсә, башҡорт кухняһы бар ул, ә бына уны үҫтереү, камиллаштырыу өсөн республикабыҙҙың дөйөм иҡтисадын, атап әйткәндә, ауыл хужалығын үҫтерергә кәрәк. Сөнки башҡорт кухняһын булдырыуҙа иң төп талап - беҙ үҙебеҙҙең ерҙә үҫкән игендән тартылған ондо, итте, һөттө, ҡоротто, йәшелсә-емеште, шәкәрҙе генә ҡулланырға тейешбеҙ. Әммә уларҙың үҙкиммәте ситтән килтерелгәнгә ҡарағанда ике-өс тапҡырға ҡиммәтерәк. Бөтөн мәсьәлә ана шул хаҡ айырымлығына барып тоташа. Әйткәндәй, Мәскәүҙә булып үткән "Пир" йәрминкәһендә беҙҙең "Пышка" компанияһы ла ҡатнашҡайны. Бында башҡорт балынан тыш, тағы ла беҙҙең дүрт-биш төрлө ризыҡты һайлап алдылар: ҡаҙ, Иглин һуғаны, ҡыҙыл эремсек, гөбәҙиә, йылҡы ялыһы. Ғөмүмән, Мәскәүҙә лә, Санкт-Петербургта ла, сит илдәрҙәге сараларҙа ла төрлө күргәҙмәләр башҡорт кухняһы ризыҡтарынан башҡа үтмәй һәм уларҙа ҡатнашыусылар беҙҙең күргәҙмәләр эргәһенә эркелеп килә. Тик беҙҙә "Башҡорт кухняһы" тигәнде бренд итеп күтәреп, рекламалау эше генә аҡһай әлегә. Әйтәйек, ҡыҙыл эремсекте, ҡоротто, ҡаҙылыҡты фәнни нигеҙләүҙәр менән иҫбатлатып, бөгөндән донъя кимәлендә һатыуға сығара алыр инек.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

**Рәхмәт - тормошта иң йыш ҡулланылған һүҙҙәрҙең береһе. Ә инде арабыҙҙа рәхмәт һүҙен көнөнә бер тапҡыр булһа ла әйтмәгән йә ишетмәгәндәр бар икән, тимәк, ундай кешеләрҙең тормошонда нимәлер дөрөҫ түгел һәм төптән уйланырға урын бар...**

Һәр ата-әсә балаһына бәләкәй саҡтан "рәхмәт" һүҙен әйтергә өйрәтә. Минең әсәйем, рәхмәт һүҙен әйттергәс, мотлаҡ рәүештә "Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр" тип тә өҫтәп ҡуя торғайны. "Әгәр бер рәхмәт кенә мең бәләнән ҡотҡара ҡалһа, беҙҙең тормошобоҙҙа бөтөнләй бәләләр булмаҫ ине. Көнөнә күпме рәхмәт ишетәбеҙ, ә проблемалар баштан ашҡан", - тип бала аҡылы менән уға ҡаршы сыҡҡаным да булды. Ләкин әсәйем рәхмәт менән рәхмәт араһында ла ҙур айырма барлығын аңлата алмағандыр инде, күрәһең. Уныһын, йәшәй торғас, тормош үҙе аңлатты. Әлбиттә, һүҙ ыңғайына ғына, этикет ҡағиҙәләренә ярашлы ғына әйтелгән рәхмәт һүҙҙәренең әллә ни әһәмиәте булмауы ла мөмкин бит. Ә бына ысын күңелдән, тәрән кисереш менән әйтелгән рәхмәттәр магик көскә эйә һәм, ысынлап та, һауап, изгелек булып үҙеңә бер ваҡыт кире урап ҡайта. Ул изгелекте һиңә ҡасандыр рәхмәттәр уҡыған кеше ҡайтара тигән һүҙ түгел. Киреһенсә, беҙ "Ит изгелек - көт яуызлыҡ" тигәндәй, үҙебеҙ ярҙам иткән кешенән йыш ҡына ниндәйҙер этлек, хыянат кисерәбеҙ ҙә, тағы изгелектең изгелек булып урап ҡайтасағына ышанысыбыҙ кәмей. Әммә тормоштоң яҙылмаған бер ҡанунға ҡоролғаны кешелек тарафынан күптән иҫбат ителгән: "Ни сәсһәң - шуны урырһың". Һин башҡарған изгелегең өсөн рәхмәтте кешеләрҙән булмаһа, Хоҙайҙан берәй бәхетле осраҡ, уңышлы эш, бүләк, отош рәүешендә барыбер аласаҡһың.

Тормош тәжрибәһе туплай торғас, мин әсәйемдең мәҡәлен үтә ябай итеп, бер яҡлы ғына аңлаған булыуымды ла төшөндөм. Бында һүҙ беҙгә әйтелгән рәхмәттәр хаҡында ғына түгел, ә күберәк үҙебеҙ әйтергә тейешләләре хаҡында бара. Рәхмәтле була белеүебеҙ беҙҙе мең бәләнән ҡотҡара икән! Үкенескә ҡаршы, беҙҙең күбебеҙ рәхмәтле була белмәй. Бәлки, беҙ бер-беребеҙгә теге йәки был ярҙамы өсөн рәхмәт һүҙҙәрен йәлләмәйбеҙҙер, әммә уны иң төп адресҡа - Хоҙайға әйтергә онотабыҙ. Беҙ уға күберәк теләктәребеҙҙе, үпкәләребеҙҙе һәм мыжыуҙарыбыҙҙы ғына оҙатабыҙ: машинабыҙ юҡ, булһа ла, иҫке "Жигули", ә күршенеке - ялтырап торған иномарка; эшебеҙ юҡ, булһа ла аҡсаһы аҙ, ә хеҙмәттәшебеҙ, ялҡауыраҡ һәм һәләтһеҙерәк булһа ла, эш хаҡын ике тапҡырға күберәк ала. Дошмандар карьера яһарға ирек бирмәй, аҫтыртын аяҡ сала. Етмәһә, хөкүмәт менән йүнһеҙ хакимдар етәкселек итә...

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Өфөлә "Биатлон" спорт-сәләмәтләндереү комплексында "Рәсәй саңғы юлы -2014"кә старт бирелде. Тантанала Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов, Рәсәй Федерацияһы Президентының Эске сәйәсәт буйынса идаралығы начальнигы урынбаҫары Радий Хәбиров, республиканың йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Андрей Иванюта ҡатнашты. "Саңғы юлы" стартынан тыш, спорт байрамы сиктәрендә шулай уҡ "Ихата чемпиондары лигаһы. Ҡышҡы старт" фестивале үтә. Уның программаһына гер спорты, арҡан тартыу, дартс, быймала ҡарҙа туп менән хоккей һәм "Атай, әсәй һәм мин - спорт ғаиләһе" күңелле эстафетаһы ингән.

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Комсомольская правда" гәзитендә баҫылған интервьюла 2015 йылда төбәк башлығы һайлауҙарында ҡатнашыуы тураһында әйтә. "Һайлауҙарға барам. Күп проекттар башланған, уларҙы тамамларға кәрәк. Эшемде дауам итеүҙе теләүсе кешеләр ҙә байтаҡ. Улар миңә ышана. Мин уларҙың өмөттәрен өҙә алмайым", - тип белдерҙе Рөстәм Хәмитов. Ваҡытынан алда һайлауҙар тураһындағы имеш-мимеш хәбәрҙәрҙе республика етәксеһе раҫламаны. "Төбәк башлығы һайлауҙары 2015 йылдың көҙөндә үтергә тейеш. Улар ғәҙел көрәштә үтер тип ышанам", - тине Башҡортостан Президенты.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте 2014 йылда үҙ эшмәкәрлегенең өҫтөнлөклө йүнәлештәрен раҫланы. Һөҙөмтәле дәүләт идара итеү сиктәрендә, атап әйткәндә, 2020 йылға тиклем Республиканың Социаль-иҡтисади үҫеш стратегияһына төҙәтмәләр индереү уйланыла. Һөҙөмтәлә тулайым төбәк продуктын - кәм тигәндә 5 процентҡа, сәнәғәт етештереүе индексын - кәм тигәндә 4 процентҡа, төп капиталға инвестициялар күләмен кәм тигәндә 6 процентҡа үҫтереү көтөлә.

✓ Республика иҡтисад лицей-интернаты нигеҙендә "Башҡортостан тарихы, мәҙәниәте" һәм "Тормош мәктәбе" предметтары буйынса олимпиада үтте, унда муниципаль һәм ҡала этаптары еңеүселәре - 8-9 синыф уҡыусылары ҡатнашты. Интеллектуаль ярышта ҡатнашыуҙан тыш, уҡыусылар Рудольф Нуриев тураһында "Визит" фильмын ҡараны.

*ШАҢДАУ*

# "БӘНДӘГӘ БӘНДӘ БУЛМА",

## йәғни ҡоллоҡ үҙ йөҙөн үҙгәртә



**Гәзиттең былтырғы 51-52-се һандарында Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың "Бәндәгә бәндә булма" тигән мәҡәләһен уҡығас, оҙаҡ уйланып йөрөнөм. Иҡтисадсы булараҡ, ҡоллоҡтоң кешелек тарихында тотҡан урыны мине күптәнән ҡыҙыҡһындыра ине.**

Автор килтергән тарихи миҫал күпте һөйләй. Әммә донъя тарихында сағыштырмаса һуңыраҡ булып үткән икенсе ваҡиғалар ҙа иғтибарға лайыҡ. Христофор Колумб Американы асҡас, уны башлыса Испания һәм Португалия яулай башлай. Урындағы аҫаба халыҡ Европа ҡунаҡтарын тәүҙә бик ихлас, асыҡ күңел менән ҡабул итә. Әммә алтын һәм көмөшкә нәфселе колонизаторҙар вәхши ысулдар менән урындағы халыҡты уларға хеҙмәт итергә, ошо металдарҙы сығарыу менән шөғөлләнергә мәжбүр итә башлай. Аҫабаларҙың һәр береһенә жетон биреп, һәр өс ай һайын бер уймаҡ алтын йәки 25 фунт мамыҡ тапшырырға ҡушыла. Был норманы үтәмәгән кешенең ҡулдарын өҙә сабалар.

Көньяҡ Америкала шәкәр етештереү ҙур табыш килтерә башлағас, Европа капиталы эшсе ҡулдарҙы вәхшиҙәрсә эксплуатациялауҙы тағы ла нығыраҡ көсәйтә. Ошо ауыныҙлыҡ арҡаһында ике быуат эсендә Американың аҫаба халҡы 100-145 миллиондан тик 5 миллионға тороп ҡала. Бындай геноцид кешелек тарихында башҡаса булмаған. Хәйер, Көнбайыш дәүләттәре Америка менән мәшғүл булған мәлдә Мәскәү батшалары Ҡаҙанды, Башҡортостанды һәм Себерҙе яулай. Колонизациялау ысулдары әллә ни айырылмай - бында Һөйәнтүҙ фажиғәһен генә килтереү ҙә етә.

Американың көньяҡ штаттарында шулай уҡ туҡыма эшләү өсөн мамыҡ үҫтерә башлайҙар. Урындағы индеецтарҙы плантацияларҙа эшләтә алмағас - улар килмешәктәргә буйһонорға теләмәгән - яңы Америка капиталистары иң тәүҙә Европанан яҡшы тормош әҙләп күсеп килгәндәрҙе өс йылдан һигеҙ йылға тиклем юл хаҡын ҡаплатыу өсөн ҡолдарға әйләндергән. Шунан һуң Африканан күпләп ҡолдар һатып ала башлағандар. Юлда 110 миллион Африка кешеһенең күпселеге - 90 проценты - үлеүенә ҡарамаҫтан, иҡтисади йәһәттән был бик отошло булған. Африка ҡолдары аҡ тәнле эшселәрҙең эш хаҡының төшөүенә лә булышлыҡ иткән. Улар урындағы халыҡтан айырмалы, плантацияларҙы ташлап ҡасып китә алмаған. Был, тора-бара, ҡара тәнлеләргә ҡарата нәфрәт тыуҙырған һәм расизмдың барлыҡҡа килеүендә тик ошо ғына сәбәп ята. Төньяҡ штаттарҙа түбән квалификациялы эшсе ҡулдар эшләй алған тармаҡтар үҫешмәгәс, ҡоллоҡ әллә ни таралмаған - тик өй хеҙмәтселәре генә ҡара тәнлеләрҙән торған.

Бына шулай, хәҙер бөтә донъяға "өлгө" булып торған АҠШ һәм Англия демократиялары ҡоллоҡ нигеҙендә үҫеш алған. Рәсәйҙә барған баҙар иҡтисады (капитализм) тәҙөү ҙә ошо юл менән атҡарыла, тиһәк, хата булмаҫ. Хәҙер төрлө халыҡ-ара конвенциялар тарафынан ҡолдар хеҙмәтен ҡулланыу тыйылыуға ҡарамаҫтан, ҡоллоҡ яңы формалар ала бара. Яңы Рәсәй капиталы ла арзан эшсе ҡулдарын ҡулланыуҙы хуп күрә. Үҙебеҙҙең дә граждандарыбыҙҙың ҡол хәлендә йәшәгәне мәғлүм - ваҡыты-ваҡыты менән теге йәки был төбәктә ҡоллоҡтан ҡасып ҡотолған яҡташтарыбыҙ тураһында ишетергә була. Бер нисә йыл элек Борай районының прокуроры үҙенең хужалығында бер нисә мигрантты ҡол хәлендә тотҡаны билдәле булғайны, тиҙ генә был тема-ны ябып ҡуйһалар. Сит ил граждандарының иһә, берәмләп түгел, тотош ҙур төркөмдәр булып, ташландыҡ фермаларҙа, биналарҙа, насар шарттарҙа тик тамаҡ байына ғына эшләргә мәжбүр булып көн иткәндәрен йыш ишетергә тура килә. Әммә бер кемдең дә уларҙы ҡол тип танығыһы килмәй. Ысынында, улар замана ҡоло - паспортһыҙ, визаһыҙ, бер ниндәй хоҡуҡһыҙ эш атына әйләнгән кеше ҡол түгелме ни?

Төрлө иҡтисади һылтауҙарға таянып, йыл да сит ил граждандарын эшкә йәлеп итеү киң тарала бара хәҙер беҙҙә. Үҙебеҙҙең илдә типһә тимер өҙөрлөк 8-9 миллион кеше, бушҡа эшләгеһе килмәй, өйҙә ятырға мәжбүр. Был күренештең тарихта булғаны юҡтыр. Ысынлап та, үҙ граждандарына лайыҡлы эш хаҡы түләү урынына күпкә арзаныраҡҡа ҡол хәлендәге хоҡуҡһыҙ мигранттарҙы яллау отошлораҡ шул. Ауыр физик эш талап иткән тармаҡтарҙы (төҙөлөш, ауыл хужалығы һ.б.) ошо "ҡара халыҡ" баҫып бөтөп бара. Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек мегаполистарҙа коммуналь хужалыҡ өлкәһендәге эштәрҙе тулыһынса тиерлек мигранттар башҡара. Мәғлүмәттәр буйынса, тик Мәскәү өлкәһендә генә ошо ҡол хәлендәге кешеләрҙең иҫәбе 130 мең тирәһе тәшкил итә. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: ай буйына эшләп алған аҡсаң ай буйына тик ашарға, торлаҡ, транспорт өсөн генә түләргә етеп, башҡа нәмә өсөн ҡалмаһа, ысынында, һинең был эш урының ҡоллоҡ түгелме ни?

Килмешәктәр баҫып алыуы урындағы халыҡта ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Әммә киң матбуғат саралары был халыҡ-ара конфликттарҙа ғәйеплеләрҙе тик теге йәки был милләт вәкилдәре араһынан ғына эҙләй. Ысынында, был хәл өсөн яуаплылыҡты яңы Рәсәй капиталы, уның һағында торған дәүләт вәкилдәрендә эҙләргә кәрәк. Урындағы халыҡты йәшәү сығанаҡтарынан мәхрүм итеүгә йүнәлтелгән саралар тик капитал мәнфәғәтенән генә эшләнә. Рәсәйҙә элек-электән шәхси хужалыҡ, урманйылғалар эшһеҙ ҡалғандар өсөн йәшәү сығанағы булып хеҙмәт итә ине. Ауылда йәшәгән туғандар ауыр саҡта ит, һөт, йәшелсә менән, урман, йылға-күлдәр - бөшмәк, еләк, балыҡ һ.б. менән ҡотҡара ине. Тора-бара ауылда йәшәгәндәр өсөн мал-тыуар тотоу, баҡса ҡарау уңышһыҙ шөғөлгә әйләнә бара, күптәр ашарға магазиндан һатып алыуҙы хуп күрә. Балыҡ тотоуҙы түләүле итеү ҙә ошо сығанаҡты бөтөрөүгә алып бара. Үзбәк-тажиктарҙың был сығанаҡтары булмағас, улар түбән эш хаҡына ризалашырға мәжбүр ҙә инде.

Яңыраҡ Әбйәлил районы Хәмит ауылында ҡәбер бураһына тип 1 кубометрҙан да кәм ҡарағас ҡырҡҡан кешегә 50 меңдән артыҡ штраф һалыуҙары тураһында шауланылар. Утын йәки өй бурар өсөн ағас алып булмау шарттары ла эш кешеһен тик бер генә сығанаҡҡа - эш хаҡына - бәйләп, уны ҡол хәленә төшөрөргә тырышыуҙы аңлата түгелме? Кемдәрҙер уйынса, тик ошо осраҡта ғына хеҙмәт етештереүсәнлеген Көнбайыш кимәленә еткереп буласаҡ.

Әхмәр Үтәбай яҙғанса, бәндәне ҡол иткән Америка халҡының африканлыларҙы "негр" тип атарға ҡурҡып, "афро-американлы"ға әйләндереүе лә, улар вәкиле Барак Обаманың президент булып китеүе лә Алланың өләшенә ингән өсөн. Уның яҙаһылыр. Беҙҙең дә тиҙ арала ошо хәлгә дусар булыуыбыҙ бар. Волгоград өлкәһендә бер ҡара тәнленең депутат булып китеүе быға асыҡ миҫал. Беҙ уны Рәсәйҙә хас милли толерантлыҡ тип кенә ҡабул иттек. Әлегә...

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

Ожмахта ике фәрештә йәшәгән, тиелә бер хикмәтле хикәйәттә. Уларҙың береһе болоттарҙа ял итеп тик ятҡан, икенсеһе ер менән күк араһында осоп йөрөгән. "Һин ниңә туктауһыҙ тегеләй-былай елдерәһең ул?" - тип һораған болот өҫтөндә ятҡан фәрештә. "Мин Хоҙайға "Ярҙам ит..." тип башланған хәбәрҙәрҙе ташыйым, - тигән ул. - Ә һин ниңә һәр ваҡыт ял итәһең?" Тегеһе былай тип яуап биргән: "Ә мин шул кешеләрҙең Хоҙайға "Рәхмәт..." тип башланған хәбәрҙәрен ташырға тейешмен. Тик..."

Фәрештәнең артабан нимә әйткәне хаҡында һәр кем үҙе уйланһын. Нимә өсөн Хоҙайға рәхмәт әйтергә, тиер, бәлки, берәү. Ә иҫәнһау булыуыбыҙ, йортобоҙ, ғаиләбеҙ, атай-әсәйебеҙ имен, тамағыбыҙ туҡ, өҫтөбөҙ бөтөн булыуы аҙмы ни рәхмәт әйтер өсөн? Аллаға шөкөр, донъялар тыныс, илдә ығы-зығы, һуғыштар юҡ - исмаһам, шуның өсөн дәүләтебеҙгә рәхмәтле булырға кәрәк. Әлбиттә, тормошта күңелдә ҡырылыҡ хәлдәр һәм беҙҙе рәнйеткән кешеләр ҙә етерлек. Әммә улар ҙа беҙгә тиктән генә осрамай, уларға ниндәйҙер фәһем һалынған. Был һынауҙар беҙҙе нимәләргәлер өйрәтер, дөрөҫ юлға баҫтырыр өсөн, аҡыллыраҡ, камилыраҡ яһар өсөн өҫтән бирелә. Шуға үҙеңде яратмаған кешеләргә лә рәхмәтле була белергә кәрәк.

Шундай кәңәш. Әгәр теләктәрегеҙ тормошҡа ашһын, донъяғыҙ алға китһен, тиһәгеҙ, зарланыуҙан, әрләшеүҙән туктап, һәр көнөгөҙҙө бәләкәй генә яҡшылыҡ өсөн дә рәхмәт уҡыу менән тамамлағыҙ һәм иртәгәһе көндө шул уҡ гәмәлдән башлағыҙ. "Рәхмәт дәфтәре" асып, уларҙы яҙып барһаң, һәҙәмтәһе тағы ла яҡшыраҡ була, ти психологтар. Бәхет ваҡ ҡына шатлыҡтарҙы ла аңғарып, шуларҙы ҡәҙерләй, баһалай белеүҙә.

**Рәхимә МУСИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Рәсәй геологияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Роман Павлов менән осрашты. Яҡтар ер аҫты геологияһын өйрәнеүҙе артабан дауам итеү өсөн шарттар булдырыу менән бәйле мәсьәләләр тураһында фекер алышты.

✓20 февралдән алып 27-нә тиклем Башҡортостанда "Урал моңо-2014" халыҡ-ара төрки йәштәренең музыкаль ижады конкурс-фестиваленең һайлап алыу турҙары уҙа. Конкурста ҡатнашыусыларҙы Дыуан районында, Өфөлә, Сибайҙа һәм Күмертауҙа тыңлаясаҡтар, тип хәбәр итә Республика халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәте. "Урал моңо-2014" төрки йәштәренең 17-се музыкаль фестивале Өфөлә 28-30 майҙа үтә.

✓Башҡортостанда эш биреүселәр инвалидтарҙы эшкә урынлаштырыу өсөн өҫтәмә эш урындарын йыһазландырыуға субсидиялар аласаҡ. Документҡа ярашлы, 2014 йылда эш биреүселәргә бер эш урынын йыһазландырыу өсөн кәрәкле ҡоралмалдар һатып алыуға һәм монтажлауға 70,9 мең һум күләмендә субсидия бүленәсәк. 2015 йылда был сумма 74,2 мең һумға тиклем арттырыласаҡ. Был средстволар төбәк бюджетына федераль ҡаҙнанан күсәсәк. Был сара иҫәбенә быйыл бөтәһе 286 кеше эшкә урынлаштырыласаҡ тип күҙаллана.

✓Республика Хөкүмәтенең тейешле бойороғо буйынса, Башҡортостан ҡарамағындағы төбәк һәм муниципаль-ара юлдар буйынса яҙғы осорҙа хәрәкәтте ваҡытлыса сикләүҙә 1 апрелдән алып 30-на тиклем индерәсәктәр. Ваҡытлыса сикләү осоронда транспорт саралары күсәренә мөмкин тиклем төшкән йөк ауырлығы билдәләнәсәк. Магистралдәрҙә үлсәү контроле пункттары ойошторолаҫаҡ. Шулай уҡ ваҡытлыса сикләү осоро 1 июндән алып 31 августа тиклем һауа температураһы 32 градустан ашҡан осраҡта ғәмәлдә буласаҡ: ауыр йөк машиналарына 22 сәғәттән 10 сәғәткә тиклем йөрөргә рөхсәт ителәсәк.

✓14 февралдә Силәбе өлкәһе Арғаяш ауылының район мәҙәниәт йортонда Башҡортостан "Китап" нәшриәтенең китап продукцияһының кинәйтелгән күргәҙмә-сауҙаһы үтте. Нәшриәттә хәбәр итеүҙәренсә, әҙәбиәт яратыусылар өсөн Азат Абдуллиндың сәсмә әҫәре, Барый Ноғомановтың "Бәхетең һинең ҡулдарҙа" повесы, Хәйҙәр Тапаҡовтың, Таңсулпан Ғарипованың әҫәрҙәре, Башҡорт теленең академик һүҙлеге, балалар һәм уҡыусылар әҙәбиәте, шулай уҡ төрлө милли сувенирҙар тәҡдим ителде.

**"Башинформ"дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ЮЛДАР КИҢӘЙТЕЛӘСӘК

**Өфө ихаталарын төҙөкләндереүгә ҡала бюджеты 250 миллион һум бүләсәк. Был хаҡта үткән матбуғат конференцияһында Өфө хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Владимир Дмитрюк хәбәр итте.**

2014 йылда шулай уҡ урамдарҙы киңәйтеү дауам итәсәк. Йәйен эштәр Сочи урамында, Октябрь проспектында (Аграр университетынан алып Галле округы урамдарына тиклем), Интернациональ, Вологда урамдарында дауам ителәсәк. Көндәр йылытҡас, Чесноковка юл күперендә эшкәртеү эштәре, "Өфө - Аэропорт" трассаһында ер өҫтө үткәүелдәре, Затон яғына күпер һәм Өфөнөң көньяҡ битләүендә дамба төҙөү башланасаҡ.

Йылытыу миҙгеле үтеп барыуы тураһында һөйләгәндә Владимир Дмитрюк, коммуналь аварияләр әҙемтәләре тиҙ бөтөрөлдө һәм кешеләр уңайһыҙлыҡ кисермәне, тип билдәләне. "Сатлама һыуыҡтарҙа Октябрь проспектындағы ҡайһы бер йорттарҙы йылытыуҙа етди проблемалар булды. Тиҙ арала был йорттарҙағы технологик проблема хәл ителәсәк, - тип аңлатты Владимир Дмитрюк. - Бәлки, йорттарҙы шәхси насос менән йыһазландырырбыҙ, хәҙер проектсылар технологик схеманы үҙгәртеү мөмкинлеген өйрәнә".

Ҡар таҙартыу һәм сығарыу тураһында һүҙ сыҡҡас, Владимир Дмитрюк, ихаталар территорияларын таҙартылған, махсус машиналар кәрәкле осрақта үтеп инә ала, тип билдәләне. Эш ихаталарҙа ҡуйылған һәм ташланған машиналар арҡаһында ҡатмарлаша. Өфөнөң заманса тығыҙ ихаталары шарттарында МТЗ һәм ДК кеүек эре техника ыратып эшләй алмай, бәләкәй габаритлы техникалар кәрәк, тип билдәләне хакимиәт башлығы урынбаҫары.

## "ҠОРО ЗАКОН" ИНДЕРӘЙЕК!

**"Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте Өфө һәм Баймаҡ районы халҡының алкоголгә һатыу тураһындағы федераль законға үҙгәрештәр индереү тураһындағы башланғысын хуплаһы һәм БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға ҡануниәткә төҙәтмәләр индереү тәкдиме менән мөрәжәғәт итте, уға ярашлы урындағы депутаттар үҙ ауыл биләмәһе территорияһында алкоголгә һатыуҙы тыйыу тураһында ҡарар ҡабул итә аласаҡ. Бөгөнгө көнгә активистар был закондар инициативаһын әҙерләү һәм индереүгә меңдән ашыу ҡултамға йыйған.**

Дәүләт Йыйылышында Сәнәғәт, инновацион үҫеш һәм эшҡыуарлыҡ буйынса комитет ҡарамағындағы эксперт советы ултырышында Башҡортостандың айырым районларында "ҡоро закон" индереү тураһындағы башланғысты Совет рәйесе Рәшит Хәйруллин әйтеп бирҙе.

"Этил спирты, алкоголь һәм составында спирт булған продукция етештереүҙе һәм уның әйләнешен дәүләт көйләүе һәм алкоголь продукцияһын файҙаланыуҙы (эсеүҙе) сикләү тураһында"ғы Федераль закон Рәсәй субъекттарына алкоголгә һатыу буйынса сикләүҙәр индереү хоҡуғы бирә, тип билдәләне ул. Рәшит Хәйруллин был мәсьәләне тағы ла айырым ҡарарға тәҡдим итте: алкоголь продукцияһын үҙ муниципалитеты территорияһында ваҡлап һатыуҙы тыйыу хоҡуғын урындағы үҙидара органдарына бирергә кәрәк, тине ул.

- Һәр субъект үҙ биләмәһендә алкоголь продукцияларын һатыуҙы тыя ала, тип яҙылған федераль закон бар. Ошоға оҡшаш норманы айырым районға, айырым торлаҡ пунктына индерә алабыҙ, тип иҫәпләйбеҙ, - тип хәбәр итте Рәшит Хәйруллин. - Беҙ был норманы федераль законда яҙырға тәҡдим итәбеҙ.

Был тәкдимде эксперт советы ағзалары етди өйрәнәсәк. Һуңынан әҙерләнгән инициатива Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың Сәнәғәт, инновацион үҫеш һәм эшҡыуарлыҡ буйынса комитеты депутаттары ҡарауына тәҡдим ителәсәк.

АФАРИН!

**Февраль... Буран... Башҡаса булыуы мөмкин дә түгел ине. Һәр хәлдә, башҡалар, бәлки, шикләнгәндер ҙә, әммә Өфө ҡала мэрын тәғәйенләү көнө итеп 12 февраль билдәләнеү менән күңел нисектер тынысланып ҡалды. Сөнки был дата - Башҡортостандың халыҡ шағиры, бар ғүмерен теленә, милләтенә, еренә хеҙмәт итеүгә арнаған һәм ниндәй генә ауырлыҡтар, һынауҙар ябырылғанда ла асылына һәр саҡ тоғро ҡалған Рәми Ғариповтың тыуған көнө. Ә был көн инде һәр башҡорттоң күңеленә февраль бураны булып килеп ингән һәм үҙенә күрә ниндәйҙер бер мәғәнәгә лә эйә - тап ошо көндө күңелдәрҙе аҡлаған, өмөттәргә осҡон һалған күркәм күренеш булырға, һәм, миненсә, былай көндө республиканың баш ҡалаһы етәксеһе итеп тап уның кеүек рухлы, башлаған эшенә тоғро ҡалыусы кеше һайланырға тейеш ине. Әлбиттә, әгәр ул кандидатура бөйөк шәхесебеҙҙең яҡташы ла булһа, был инде Аллаһы Тәғәләнең үҙенең теләгәне.**

# БӘРӘКӘТЛЕ БУЛҺЫН...

## февраль бураны



Ҡала мэры вазифаһына беренсе тәғәйенләүҙән һуң үткән ике йыл осоронда Ирек Ялалов, ысынлап та, үҙен ысын хужа, эшенә тоғро һәм уны яҡшы белгән етәксе итеп күрһәтте. Ошо ваҡыт эсендә эконом класлы торлаҡ төҙөү күләме өс тапҡырға тиерлек артҡан, 21 балалар баҡсаһы реконструкцияланған, кире ҡайтарылған һәм төҙөлгән. Әгәр ике йыл элек балалар баҡсаларына сират 5 мең бала булһа, бөгөнгә ул 750-гә тороп ҡалған. Ошо арауыҡта баш ҡаланың 50 урамы реконструкцияланған, йәшелләндереү буйынса ла ҙур эштәр башҡарылған. Инвестициялар йәлеп итеү күләме 100 миллиард һумға еткән. Инвестицияларҙың 10 проценты дәүләт-муниципаль партнерлыҡ өлөшөнә тура килә. Былтырҙан башлап республикала торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә тарифтар күтәрелеү һөҙөмтәһендә коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙәр артты. Республика Хөкүмәте башлығының ҡарарына ярашлы, ошо айырманы ҡыҫҡартыу маҡсатында халыҡҡа адреслы социаль түләүҙәр программаһы эшләй башланы. Быйыл өсөн баш ҡалала ғына 400 миллион һум аҡса тотонолдо. Был сығымдарҙы, әлбиттә, республика ғына түгел, ҡала бюджеты ла күтәрҙе. Ғөмүмән, ике йыл дауамында бюджеттың сығымдар статьяһы, өҫтәмә килемдәр иҫәбенә, күҙаллағандан күпкә арттырылды. Был инде ҡала округы хакимиәтенең бөгөнгө командаһы бюджетты тулыландырыу менән ныҡлы һәм етди шөғөлләнгән, тигәнде аңлата. Ә һөҙөмтә булып торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендәге ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр, ҡала инфраструктураһының үҫеше тора. Әлбиттә, һанай китһәң, эшләнгән эштәре байтаҡ яңы һайланған "иҫке" башлыҡтың. Иң мөһиме, уларҙы күрә һәм баһалай белергә кәрәк.

Баһалау, тигәндән, Өфө ҡала Советы депутаттарының Ирек Ишмөхәмәт улының эшен юғары баһалағаны мэр тәғәйенләү йыйылышында ла асыҡ күренде - 33 депутаттың барыһы ла уның өсөн тауыш бирҙе. Һөҙөмтәләр иғлан ителгәндән һуң яңы һайланған ҡала хакимиәте башлығы менән контракт төҙөлдө. Уға Ирек Ялалов менән Өфө ҡала округы Советы рәйесе Евгений Семивеличенко ҡул ҡуйҙы.

* * *

Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловты икенсе мәҙҙәткә һайланыуы менән ҡотланы һәм бер ыңғай ҡала Советы депутаттары, Өфө ҡала округы хакимиәттәре вәкилдәре, етәкселәр менән осрашып, кҿҙгә-күҙ ҡарап аралашты.

"Мэр һайлау процедураһы йәнле фекер алышыу майҙанына әүерелде, унда яңы кешеләр ҡатнашты, - тип билдәләне республика Президенты. - Яңы фекер ишетелде. Беҙ Ирек Ишмөхәмәт улының енеүенә шикләнмәйенек, шулай булды ла".

Рөстәм Зәки улы Ирек Ишмөхәмәт улына - фатиха, бер уңайҙан йыйылыусыларға "ликбез" ҙа бирҙе. "Эшләнгән эштәр тураһында һөйләгәндә, оҙон отчеттар, һандар теҙмәһе, проценттар артында иң мөһимен онотабыҙ, - тине ул. - Ә граждандар үҙҙәрен уратып алған мөхит менән, эшләнгән эштәр менән ҡәнәғәтме? Ҡайһы берҙә был һорауға кире яуап бирелә. Бөгөн Президент хакимиәтенә килгән мөрәжәғәттәрҙең 44 проценты өфөләләр өлөшөнә тура килә икән, был уларҙың әүҙемлеген генә сағылдырып ҡалмай, ә ысынлап та проблемалар барлығын раҫлай. Бөгөн эконом класлы торлаҡ төҙөү, авария хәлендәге торлаҡтарҙа йәшәүселәрҙе күсереү, торлаҡ-коммуналь хужалығын модернизациялау, граждандарға ял итеү өсөн парк зоналарын булдырыу, ҡала урмандарын сүп-сарҙан таҙартыу һ.б. мәсьәлә-

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә сит ит фотографтары эштәренең виртуаль күргәҙмәһе эшләй башланы. "Йолаларҙы һаҡлаусы Ер" күргәҙмәһендә фотосәнғәтте яратыусылар виртуаль экскурсияла була ала. Экспозицияла сит ил һәм Рәсәй фоторәссамдәренең 125 эше тәҡдим ителгән. Күргәҙмә халыҡ ижады, һөнәрҙәре, йолалары һәм республика тәбиғәте менән таныштыра. Башҡортостан тураһында эштәр Италияла, Төркиәлә, Ҡаҙағстанда, Үзбәкстанда, Тажикстанда, Татарстанда һәм Мәскәүҙә экспозицияла булған. Күргәҙмә 24 февралгә тиклем "Болоттар" заманса сәнғәт үҙәгендә үтә.

✓Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхананың үҙәк корпусында "Урал һәм Волга буйы халыҡтарының тарихына яңы ҡараш" китабының исем туйы үтте. Китаптың авторы - крайҙы өйрәнеүсе, социология фәндәре кандидаты Йәдкәр Баширов. Үҙенең монографияһында ғалим Бөйөк Башҡортостандың булғанын раҫлай, уның халҡы берҙәм боронғо төрки теленең башҡорт-ҡыпсаҡ диалектын йөрөтөүселәр булған.

✓17-22 февралдә Башҡортостандың Әбйәлил районында "Юбилейный" шифаханаһында "Банктарҙың мәғлүмәти хәүефһеҙлеге" VI Урал форумы үтәсәк. Республиканың Милли банкынан хәбәр итеүҙәренсә, форумда инновацион банк технологияларын индереү һәм мәғлүмәти хәүефһеҙлекте тәьмин итеү, түләү системалары хәүефһеҙлеге, банк секторында киберенәйәтселекте иҫкәртеү һәм уға ҡаршы тороу мәсьәләләре буйынса фекер алышыу ҡаралған. Форумды Рәсәй банктары ассоциацияһы Рәсәй Банкы рәсми ярҙамында "Авангард Үҙәк" компанияһы менән берлектә уҙғара.

✓"Һылыукай-2014" башҡорт гүзәллек бәйгеһенең гала-концертында ҡатнашыусыларҙың исемдәре асыҡланды. Өс турҙан һуң 12 ҡыҙ һайлап алынды. Улар араһында - Санкт-Петербургтан Алина Байзакова, Мәскәүҙән - Камилә Биҡҡолова, Магнитогорскиҙан Гөлнара Шәмсетдинова, Учалынан Лилиә Вилданова, Сибайҙан Раушания Юлдыбаева һәм Эльвира Ғүмәрова сығыш яһаясаҡ. Ҡалған ҡыҙҙар республика районларынан: Мәләүездән - Айгөл Вәлитова, Әбйәлилдән - Элвира Иҫәнбулатова, Көйөргәзәнән - Гөлназ Сәлтәшева, Ейәнсуранан - Ләйлә Харисова, Ғафуриҙан Илүзә Йәғәфәрова. Иң матурҙарын һәм лайыҡлыларын жюри ағзалары 4 мартта Өфө Ҡала мәҙәниәт һарайында үтәсәк конкурс финалында һайлаясаҡ.

*✓ Рөстәм Зәки улы белдереүенсә, бөгөн халыҡты йәмғиәттә хәҡиҡәттең булмауы, хоҡуҡтары боҙолоуы, хеҙмәткәрҙәрҙең шәхси ғорурлығын һәм дәрәжәһен яҡлай алмауы борсой һәм тап ошо хәл-торош көсөргәнеш тыуҙыра ла инде.*



ләр һаман да тиҙ арала хәл ителеүен көтә. Шуға ла дан-шөһрәткә алданырға ярамай. Йәмғиәт менән бергә халыҡ та үҙгәрә. Элек кешеләр етәкселәр әйткәнгә риза булып ҡына йәшәһә, хәҙер улар үҙҙәренең баһаһын белә, үҙҙәренә ихтирам менән ҡарай. Улар үҙ хоҡуғын талап итә һәм яҡлай, өҫтөнлөктәре һәм ҡиммәттәре үҙгәрә. Бөгөн бынан элекке күҙаллауҙар һәм ҡараштар менән алға барып булмай. Кешеләргә бай, үҙен ерҙең кендеге итеп тойған етәкселәр түгел, ә ябай халыҡты тыңлаған һәм аңлаған, уларға ярҙам иткән, намыҫлы, аҡса тип йән атмаған, халыҡ мәнфәғәтен күҙ уңында тотоп эшләгән етәксе кәрәк. Сөнки кешелектең ҡиммәттәре үҙгәрә, беренсе урынға йәмғиәт түгел, ә кешенең шәхси тормошо алға сыға. Беҙ, тәү сиратта, граждандарҙың ихтыяжына иғтибар йүнәлтергә тейешбеҙ..."

Рөстәм Зәки улы белдереүенсә, бөгөн халыҡты йәмғиәттә хәҡиҡәттең, дөрөҫлөктөң булмауы, хоҡуҡтары боҙолоуы, хеҙмәткәрҙәрҙең шәхси ғорурлығын һәм дәрәжәһен яҡлай алмауы борсой һәм тап ошо хәл-торош көсөргәнеш тыуҙыра ла инде. Бәлки шуға ла, "Ғәҙеллек һәм хоҡуҡтар, әгәр уларҙы һатып алһаң, бар", тигән фекергә этәрәлер. Әммә власть - аҡса - власть реформаһын үткәреүгә юл ҡуйырға ярамай, тине Р. Хәмитов. Был йүнәлештә иң мөһиме булып дәүләт власының, йәмғиәттең системалы эшләүе, уның асыҡ һәм намыҫлы булыуы тора. Бында инде дөрөҫ идара итеү формаһын табырға кәрәк.

"Алдынғы, эшен планлы рәүештә баҙар мөнәсәбәттәренә ярашлы алып барған ойошма етәксеһе ваҡытының өстән бер өлөшөн - ағымдағы эштәрҙе хәл итеүгә, өстән бер өлөшөн - коллектив менән эшләүгә, өстән бер өлөшөн стратегияны алға һөрөүгә бүленергә тейеш. Ә беҙҙә 90 процент ваҡыт ағымдағы эштәрҙе йырып сығыуға китә", - тине республика башлығы. Шулай уҡ ул республика предприятиеларының "серле объектҡа" әүерелеп бөтөүен, уларҙың алдағы 3-5 йылды үҙ эсенә алған бизнес-пландары буйынса эшмәкәрлеге республика Хөкүмәте өсөн сер булып ҡалыуына әсенеү белдерҙе.

Сығышының һуңында Рөстәм Хәмитов ҡабат ябай халыҡҡа урап ҡайтты: "Ябай халыҡты ябай, бөгөн һәм ошо урында хәл итеү мөмкинлеге булған проблемалар борсой. Власть ошо ябай проблемаларҙы хәл итә ала".

Үҙ сиратында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов үҙенең командаһы, депутаттар корпусы һәм республика етәкселеге ярҙамы менән алдына ҡуйылған бурыстарҙы үтәргә вәғәҙә бирҙе.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Февраль бураны яңы тәғәйенләнгән "иҫке" етәксе һәм уның командаһы алдына тәүге һынауҙы ҡуйҙы ла инде: ҡала урамдарын ҡар менән тултырҙы. Әммә Ирек Ишмөхәмәт улы уны үҙенсә юраны: ҡар яуа икән, тимәк, бәрәкәт яуа! Әйҙә, шулай булһын, бары тик оло өйөбөҙҙә генә "буран" ҡупмаһын!**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## ҺОРАУ-ЯУАП

### ӨЛӘСӘЙГӘ - ПОСОБИЕ

**Ҡыҙым университетта уҡый. 3 айлыҡ балаһы бар. Мин хаҡлы ялдамын, ләкин эшләп йөрөйөм. Ҡыҙым урынына балалар өсөн түләнгән айлыҡ пособиены юллай аламмы?**

Хеҙмәт кодексының 256-сы статьяһына ярашлы, бала ҡараған өсөн ял менән тулыһынса йәки өлөшләтә баланың әсәһе генә түгел, ә шулай уҡ баланы даими ҡараған атаһы, өләсәһе, олатаһы йәки башҡа туғандары ла файҙалана ала. Бала ҡараған осорҙа улар, үҙҙәренең теләге буйынса, ҡыҫҡартылған эш көнө буйынса йәки өйҙә эшләргә хоҡуҡлы. Эш биреүсе тарафынан кешенең эш урыны һәм вазифаһы һаҡлана. Пособие юллау өсөн эш биреүсегә баланың тыуыуы тураһындағы таныҡлыҡ күсермәһе, баланың әсәһенең уҡыған еренән уның пособие юлламауы һәм алмауы тураһындағы белешмә беркетелгән ғариза менән мөрәжәғәт итергә кәрәк.

### ҺАЛЫМ КЕМДЕКЕ?

**Минең пай ерем бар. Әлеге ваҡытта уны фермерға ҡуртымға биргәнмен. Был осраҡта ер өсөн һалымды кем түләргә тейеш?**

Һалым Кодексының 388-се һәм 389-сы статьяларына ярашлы, һалымды ер үҙ милкендә булған кеше түләргә бурыслы. Шуға күрә, түләүҙәрҙе ваҡытында атҡарыу һеҙҙең бурысығыҙ.

### АВТОБУСҠА КҮСМӘЙЕМ...

**Минең ағайым бер йыл элек автомобиль предприятиеһына водитель булып эшкә урынлашты һәм еңел машинала йөрөнө. Күптән түгел предприятие етәксеһе уны автобус водителе итеп күсереү тураһында ҡарар сығарҙы, ә эш режимы һәм эш хаҡы күләме элекке килеш ҡалды. Бындай шарттарҙа эшләргә теләмәгән ағайым автобусҡа күсеүҙән баш тартты һәм уны дисциплинар яуаплылыҡҡа тарттырҙылар. Был дөрөҫмө?**

Барыһы ла ағайығыҙҙың эшкә урынлашҡан ваҡытта предприятие менән төҙөгән килешеү шарттарына бәйле. Әгәр ҙә килешеүҙә ул еңел автомобиль йөрөтөүсе булараҡ эшкә ҡабул ителгән, тип күрһәтелһә, икенсе автомобилгә (автобусҡа һ.б. техникаға) күсереү тик уның яҙма ризалығынан сығып ҡына башҡарыла. Әгәр ҙә инде килешеүҙә автомобиль йөрөтөүсе тип кенә билдәләнһә, уны икенсе төр техникаға эшкә күсереү нигеҙле. Был осраҡта ағайығыҙҙың автобус йөрөтөүгә күсмәүе эшсенең уға һалынған хеҙмәт бурыстарын үтәмәү тип һаналырға һәм ошоға ярашлы ул дисциплинар яуаплылыҡҡа тарттырылыуы мөмкин.

### КЕНӘГӘМ ЯҘЫУҺЫҘ

**2005 йылдан шәхси эшҡыуармын. Ошо 9 йыл эсендә хеҙмәт кенәгәмә бер ниндәй ҙә яҙыу индерелмәне. Икенсе йылдың ғинуарында миңә 55 тула. Пенсия юллау алдынан хеҙмәт кенәгәмде үҙемә тултырырға кәрәкме? Пенсия фондына тейешле түләүҙәрҙе ваҡытында индереп барам.**

Һеҙгә хеҙмәт кенәгәһенә бер ниндәй ҙә яҙыу индерергә кәрәкмәй. Пенсия фонды системаһында теркәлгән датанан башлап шәхси эшҡыуарҙың эш стажы хеҙмәт кенәгәһендәге яҙыуҙан түгел, ә пенсия взносы түләү хаҡындағы документтарҙан сығып билдәләнә.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАШҠОРТ БАЛЫ...
## ҡунаҡтарға ла оҡшаған



**Башҡортостан умартасылары продукцияһы Сочиҙағы Олимпиада сиктәрендә барған махсус күргәҙмә-йәрминкәлә ҙур популярлыҡ менән файҙаланыуы тураһында хәбәр иттеләр.**

Белеүегеҙсә, спорт донъяһында йылдың иң мөһим ваҡиғаһы булған Олимпиадаға Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге биш тонна төрлө-төрлө продукция ебәргәйне. Күптәнән республиканың бренды булған балдан тыш, Олимпия ҡаласығының Имеретин уйһыулығындағы бренд күргәҙмәһендә һитә, һеркә һәм ҡорт елеме, шулай уҡ ҡортсолоҡ продукттарын ҡулланып дауалау-иҫкәртеү һәм косметика продукциялары күрһәтелгән. Бөтә донъя масштабындағы ярыштарҙың ҡунаҡтарына һәм ҡатнашыусыларға бөтәһе 150 төр тирәһе продукция тәҡдим ителгән.

- Беҙҙең бөтә продукцияны тиерлек, шулай уҡ ҡорт елеме менән "Сәләмәтлек шишмәһе" һыуын һәм "Башҡортостан" алкоголһеҙ бальзамын, милли башҡорт костюмдары менән биҙәлгән йомшаҡ сувенир бал ҡорттарын һатып алып бөттөләр. Күргәҙмәгә килеүселәрҙең күбеһе - сит ил кешеләре. Улар республикабыҙ менән ҡыҙыҡһына, беҙгә төрлө-төрлө һорауҙар бирә. Хатта Рәсәй картаһы төшөрөлгән электрон таблола Башҡортостан нәҡ ҡайһы урында урынлашҡанын күрһәтеүҙе һорайҙар, уларға бөтәһе лә ҡыҙыҡлы. Ярай әле, беҙҙең арала бер нисә телдә, шул иҫәптән инглиз, немец һәм португал телдәрендә еңел арашҡан кешеләр бар. Бынан тыш, Сочиҙағы Олимпиада эшендә республика тураһында үҙебеҙ менән алып килгән махсус мәғлүмәт стендтары һәм буклет-презентациялар ярҙам итә, - тип һөйләне "Башинформ" агентлығына Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге генераль директорының тышҡы бәйләнештәр буйынса урынбаҫары Рима Ибраһимова.

Махсус күргәҙмә-йәрминкә 16 мартта, XXII ҡышҡы Олимпия һәм XI ҡышҡы Паралимпия уйындары ябылғандан һуң, тамамлана.

# УҠЫТЫУСЫНЫ ХӘСТӘРЛӘП...

**Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев бойороғона ярашлы, Башҡортостан 2014 йылда яҡшы уҡытыусыларҙы аҡсалата дәртләндереү өсөн Федераль бюджеттан ете миллион һум аласаҡ.**

Аҡсалата түләү уҡытыу һәм тәрбиәләү эшмәкәрлеген, уҡытыусыларҙың ижади һәм һөнәри мөмкинлектәрен дәртләндереүгә йүнәлтелгән.

Билдәләнгән субсидиялар "Мәғариф" өҫтөнлөклө милли проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә 2006 йылдан алып бирелә. 2014 йылда 200 мең һум күләмендәге аҡсалата дәртләндереүҙе иң яҡшы бер мең уҡытыусы аласаҡ. Башҡортостанда наградалар 35 педагогҡа тапшырыласаҡ. Аҡсалата дәртләндереү конкурс һөҙөмтәләре буйынса түләнәсәк. Конкурсты үткәреү тәртибе һәм иң яҡшы уҡытыусыларҙы һайлау конкурсы критерийҙары Рәсәй Мәғариф министрлығы тарафынан билдәләнгән. Конкурсты үткәреүҙең төп принциптары - билдәлелек, асыҡлыҡ һәм уҡытыусылыҡ эшмәкәрлегендә стажы өс йылдан да кәм булмаған уҡытыусыларҙың унда ҡатнашыуы өсөн тигеҙ мөмкинлектәр булдырыу.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Артрит

❖ 50 грамм камфара, 50 грамм гәрсис порошогы, 100 грамм сей йомортҡа ағы. Спиртта тәүҙә камфара, һуңынан гәрсисте иретергә. Йомортҡаның ағын айырым туҡырға һәм тәүге өлөшкә ҡушырға. Йоҡлар алдынан ауыртҡан быуынға һөртөргә.

❖ Димексид (25 мл), 50 процентлы анальгин (2 мл-лыҡ 3 ампула), ҡайнар дистиллирләнгән һыу (20 мл). Етен туҡыманы ошо иретмәгә манып, һыҙлаған быуынды бәйләргә. Өҫтөнән полиэтилен һәм тағы ла ҡалынылраҡ туҡыма менән уратырға. Был компресты 30 минуттан 2 сәғәткә тиклем тоторға була. Ул шешеүгә һәм һыҙлауға ҡаршы ҡулланыла. Был ысул менән сирегеҙҙе дауалай алмаясаҡһығыҙ, шулай ҙа һыҙланыуығыҙ баҫыласаҡ.

❖ Быуын һыҙлауын яңы өҙөлгән бүҫер үләне (грыжник душистый) баҫа. 3 балғалаҡ үләнде ярты литр ҡайнар һыуҙа төнәтеп, һөҙәләр. Көнөнә 3-4 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсәләр.

❖ Бешкән сейә емешен һөткә ҡушып ашау ҙа быуындар шешен ҡайтара.

❖ 1 ҡалаҡ тоҙҙо 1 стакан йылы һыуға болғатып, был һыуға бейәләйҙәрҙе тығып, һығып алырға. Төнгөлөккә кейеп ятырға. Был процедура быуындарҙың һыҙлауын тынысландыра.

❖ 1 ҡалаҡ йорт йондоҙҡайы (звездчатка средняя, мокрица) үләнен 1 стакан ҡайнар һыуҙа 4 сәғәт төнәтеп, көнөнә 4 тапҡыр ашар алдынан стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә эсергә.

❖ Мәрүәт сәскәһе, ҡыр кесерткәне үләне япрағы, тал ҡайырыһы, петрушка тамырын тигеҙ өлөштә алып, болғатырға. 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 5 минут ҡайнатырға, һыуытырға, һөҙөргә. Көнөнә 2 стакан эсергә.

❖ Эт муйылы ҡайырыһы - 1 өлөш, ҡайын япрағы - 4 өлөш, тал ҡайырыһы - 5 өлөш. 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 8 минут ҡайнатырға, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм артрит ваҡытында көнөнә 2 стакан эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *Маҡсатыбыҙ - Башҡортостандың йыйылма командаһын туплап, Мәскәүҙәге Юғары Лигаға үткәреү. Әлегә заманса фекерләгән, башҡорт телендә лә, рус телендә лә берҙәй еңел ижад итә белгән авторҙарға ҡытлыҡ кисерәбеҙ.*



*БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Эрәт сиренә (ваба, тапма) им-том

**Тир ауырыуына им-том.**

1. Элек ел менән тиф була, тип уйлап, түбәндәге һүҙҙәрҙе әйтә-әйтә, ҡомалаҡ осорткандар:

*Елдән тейһәң, елгә кит,*
*Ерҙән тейһәң, ергә кит.*
*Ете юл сатына кит,*
*Ҡайҙан килдең, шунда кит!*

2. *Тауҙы ярып таш нисек сығыр,*
*(Был фәләндең) тире шулай сыҡһын,*
*Ерҙе ярып һыу нисек сығыр,*
*(Был фәләндең) тире шулай сыҡһын,*
*Ағасты ярып ботаҡ нисек сығыр,*
*(Был фәләндең) тире шулай сыҡһын!*

**Сынаяҡҡа яҙыу.** Сынаяҡ ташына шафран менән яҙалар, ул яп-ялтыр була. Сынаяҡ ташына яҙып, артабан шуны сайҡатып эсерәләр икән. Балаларға ла эсерәләр. Тир хәстәһенән дә шул һыуҙы эсереп тирләтеп терелткәндәр.

## Ерҙән тейенгән ауырыуҙарға (һейҙек-енес ағзаларына, аяҡҡа) им-том

**Ергә һалыу.** Ышаныуҙар буйынса, йығылһаң, ерҙән ауырыу тейә икән.

Шуға ла йығылһаң, тиҙ генә тороп, "Һиңә - ауырлыҡ, миңә - еңеллек", тип төкөрөнөп, артыңа ҡарамай был ерҙән китергә кәрәк. Әгәр ҙә шулай эшләмәһәң, ерҙән ауырыу тейә. Шул ауырыуҙы "ерҙән тейенгән ауырыу" тиҙәр. Ышаныу буйынса, бындай ауырыуҙарҙы тик "ергә һалыу" ысулы менән генә әмәлләп була. "Ергә һалыу", ғәҙәттә, әпсен-һамаҡ менән бергә атҡарылған. Мәҫәлән, төньяҡ-көнсығыш башҡорттарында түбәндәге әпсен ҡулланылған:

*Һыуҙан сыҡҡан һары һаҡал,*
*Ерҙән сыҡҡан Еҙ һаҡал,*
*Мине тотма, шуны тот,*
*Ай ҡайтты, көн ҡайтты,*
*Әйҙә инде, һин дә ҡайт.*
*Иртә тиһәң, кис етмәк,*
*Һыуҙан килһәң, һыуға ҡайт,*
*Ерҙән килһәң, ергә ҡайт,*
*Ҡайҙан килдең, шунда ҡайт.*

**Осоҡлау.** Ергә һалыуҙың варианты осоҡлау көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында түбәндәге әпсен-һамаҡ менән бергә башҡарыла:

*Ер инәһе Ерегән һаҡал,*
*Һыу инәһе Һыуыған һаҡал,*
*Мине тотма, шуны тот.*
*Ер кендеге бары бер.*

**Ер эйәһенә мөрәжәғәт.** Зәхмәтте имләгәндә лә Ер эйәһенә мөрәжәғәт итеү сағыла:

*Ер атаһы. Ер инәһе,*
*Тотҡан булһаң, ебәр,*
*Һин шундай матур,*
*Һин шундай сибәр.*

**Ерҙән тейенеүгә им.** Ергә һалғанда ете төрлө йән һалалар: үрмәксе, тараҡан, себеш һ.б.

**Ер тотоуҙан.**

1. Себеште салып, ҡанын ауырыуҙың тәненә һөртәләр һәм ул себеште артабан кеше йөрөмәгән ергә күмәләр. Ер тотоуҙан ҡулдар ҡалтыраһа, шулай имләгәндәр.

Ете көн тотош ер быуына һалып, ете көн мунсала йыуындырып, ер ҡуйынына күмдек, тиҙәр. Шул себеште ергә һалырға, күмергә төнгә сәғәт ун икелә барғандар. Кеше аяғы баҫылып, бер эт тә йөрөмәҫкә, ҡош та осмаҫҡа тейеш.

2. "Мине себеш күмеп терелткәйнеләр. Имсе әбей менән үҙебеҙҙең урамдан төштөк, бер ҡош тауышы юҡ, ҡараңғы. Шулай һыуға барып төштөк, һүҙ ҡушырға ярамай, һыу буйына барҙыҡ. "Ҡайтҡас, өйгә кермәҫкә, һөйләшмәҫкә ҡуштылар. Бына шулай итеп, имсе терелткән ине. Минең ҡайны урынға йығылғанға тиклем белде, һыу буйында йығылып, ҡотом алынғайны" (Урта Урал башҡорттарынан яҙып алынды).

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

# БАШҠОРТ ЮМОРЫ ЛА...

## һыу һәм һауа һымаҡ кәрәк беҙгә

**"Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа юғары уҡыу йортон тамамлап, яңы ғына эшләй башлаған йәштәр, студенттар араһында алдынғы ҡарашлы, милли рухлы, йыр-моңға, шиғриәткә, ғөмүмән, ижадҡа, спортҡа һәм сәләмәт йәшәү рәүешенә ылыҡҡан бер төркөм барлыҡҡа килде. Улар "Ҡош юлы", "Минең Рәми", "Шаяниум" һәм башҡа проекттар, тамашалар тирәләй йәштәрҙе бергә туплау идеяһы менән янған айырым шәхестәр, йәш лидерҙар һәм компаниялар башланғысында ойошто, берләште", - тигәйне бер һөйләшеүҙә "Башҡорт асыҡ КВН Лигаһы" рәйесе Урал КӘРИМОВ. Ошо фекерҙе дауам итеп, башҡорт юморы, уның ҡайҙан башланырға һәм ҡайһы сиктә үтмәҫкә тейешлеге һәм башҡалар тураһында һөйләштек Урал менән. Әңгәмәлә яңғыраған төп фекерҙәрҙе гәзит уҡыусы иғтибарына тәҡдим итмәксебеҙ. Һүҙ - ҡунағыбыҙға:**

### Йәштәребеҙ

Минә бер-нисә йыл Өфөлә үткән "Шаяниум" отҡорҙар һәм зирәктәр фестивалендә, Башҡорт асыҡ КВН Лигаһы уйындарында баһалама комиссияһы эшендә ҡатнашырға тура килде. Һәр уйын һайын йәштәрҙең камиллаша барғанын күреп ҡыуанам. Мине айырыуса һуңғы йылдарҙа барлыҡҡа килгән "Ҡош юлы" проектында (үҙең ижад иткән йырҙарҙы гитарала уйнап йырлау конкурсы) әүҙемлек күрһәтеүсе йәштәр төркөмө һоҡландыра. "Ҡош юлы"нда ҡатнашҡан егет-ҡыҙҙарҙың күпселеген студенттар, юғары уҡыу йортон тамамлап, яңы ғына хеҙмәт юлына аяҡ баҫҡан йәш хеҙмәткәрҙәр тәшкил итә. Проекттың ойоштороусылары иһә - "Шоңҡар" журналы хеҙмәткәрҙәре, "Ватандаш" журналының баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев. Йәштәр шулай уҡ күренекле шағирҙар, шағирәләр менән берлектә шиғриәт кисәләре лә үткәрә.

### Етди көлкө

Юмор - аңға тәьҫир итә торған бик көслө ҡорал. Уны белеп файҙаланһаң, тауҙар аҡтарырға, белмәһәң, үҙең көлкөгә ҡалырға мөмкинһең. Сәйәси, ижтимағи проблемаларҙы көлкө аша сағылдырыу ин уңайлы алым, минеңсә. Сөнки үҙеңде борсоған ҡырҡыу хәл тураһында агрессив рәүештә кемгәлер дәғүә белдермәйһең, хоҡуҡ һаҡлау органдары яғынан да бер ниндәй проблемалар тыумай. Бындай сығыштар тамашасыға ла бик тиҙ барып етә. Ни өсөн икәне аңлашылалыр, сөнки тамашасы бындай сараларға үҙенең күңелендә йөрөткән һорауҙарға яуап табырына ышанып килә. Шуға күрә, КВН донъяһын ябай бер шау-шыу ғына итеп аңларға ярамай: етди әйбер ул.

### Юмор ярҙамында "тел асылыу"

Һуңғы йылдарҙа матбуғат баҫмалары биттәрендә, интернетта мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәрен ҡыҫҡартыуҙан ҡупҡан бәхәстәр йышайҙы. Был тема Башҡорт асыҡ КВН Лигаһында яңғыраған сығыштарҙа ла сағылыш таба. Икенсе яҡтан, беҙ бөгөн ҡала ерлегендә үҫкән башҡорт балаларының сәхнәгә сығып, туған телдә үҙ фекерен аңлатырға тырышыуын да күрәбеҙ. КВН-да ҡатнашыр, сәхнәгә сығып, матур сығыш яһар өсөн ҡайһы бер сит милләт вәкилдәре лә башҡорт телен өйрәнә бит хәҙер. Мәҫәлән, күптән түгел Учалынан килгән командала шундай егет барыбыҙҙы ла һоҡландырҙы. КВН - ул ижад та, шул уҡ ваҡытта уйын да. Унда сәм дә бар. Шулай булғас, һөйләү телмәрен камиллаштырыу өсөн мөмкинлектәр ҙә юҡ түгел. Бәлки, беҙгә телде белмәгән балалар өсөн олимпиадалар үткәреп, китаптан ҡағыҙҙан ятлатып (әлбиттә, былары ла кәрәк), һәҙәмтә юҡлыҡҡа бошонғансы, һәр мәктәптә ошондай ҡыҙыҡлы сығыштар, конкурстар ойоштороуҙы ғәҙәт итеп алыу отошлораҡ булмаҫ инеме икән?

### Никулин феномены

Бөтә кешене лә ҡыҙыҡлы көләмәстәр яҙырға өйрәтеп булмаған кеүек, оҫта итеп көлдөрә белергә лә өйрәтеп булмай. Бәғзе берәүҙән сәхнәгә сығып, бер һүҙ ҙә әйтмәй баҫып тороуы ла мәрәкә күренә, ә кемдер берәүҙең тырышып-тырмашып, донъялағы иң ҡыҙыҡ көләмәс һөйләүе лә көлкө яңғырамай. Эш низә һуң? Моғайын, бик һирәктәргә генә бирелә торған тәбиғи һәләттәлер.

Шулай ҙа бөйөк комик, артист-юморист Юрий Никулин кеүектәр, бөгөнгө заманда йәшәүсе Джим Керри һымаҡтар башҡорт юморы донъяһында бармы? Бар! Шуларҙың береһе - "Кәкре сүкеш" командаһынан Фидан Ҡолмөхәмәтов. Был егет "Горняк Дозор" командаһы составында сәхнәгә сыҡты ла, бер миҙгел эсендә тамашасы иғтибары үҙәгенә эләкте. Быны ң сере шунда: көлкөлө сығыштар таба белеүҙән тыш, егеттә тамашасыны ҡыҙыҡһындырырлыҡ "шарм" да бар.

### Үҙебеҙсә юмор

Иғтибар итһәгеҙ, беҙҙең ерлектә тыуып, киң таралыу яулаған күп кенә лаҡаптарҙы, көләмәстәрҙе рус теленә ауҙарһаң, уларҙың үткерлеге юғала. Мәҫәлән, "Бөгөн иртән уяныл китһәм, йоҡлап ятам икән!" тигән ҡыҫҡа ғына көлкөнөң рус телендәге "Сегодня утром вдруг проснулся и вижу, что сплю лежу" вариантынан уның мәрәкә һүҙ икәнлеге башҡорт ерлеге менән таныш булмаған кешегә аңлашылып етмәүе лә бар. Башҡорт юморының үҙенсәлеген мин шунда күрәм: ул шул тиклем төртмә телле лә, шул уҡ ваҡытта кешелекле лә юмор. Ул үҙенең көләүҙ субъектын ергә һалып тапамай, урынлы ғына семетеп ала. Ошо күренеш ҡайһы бер сығыштарҙа сағылыш таба ла инде.

Беҙ башҡортса шаярыуҙы ауылдарҙа һаҡланып ҡалған матур ғәҙәт - туй мәжлесендә ҡоҙа-ҡоҙасалар мәрәкәләшеүе ваҡытында ла ҡуҙәтәбеҙ. Һәр кем уны үҙенсә күрә, үҙенсә асырға тырыша. Бына, мәҫәлән, "саф башҡортса шаяртам" тип, бәғзе бер сәхнә әһелдәре ни өсөндөр үҙҙәренең вата-емерә русса һөйләшеүенән көлөргә күнегеп алды. Был номер концерт ваҡытында бер тапҡыр ғына яңғыраһа - бер хәл әле. Ләкин концерт буйы шул турала ғына сәйнәнеү килешкән эш түгел, минеңсә...

Беҙгә "көлкө тик русса ғына булырға тейеш" тигән хаталы ҡараштан да арынырға ваҡыт. Башҡортса уйлап һәм башҡортса һөйләп тә бына тигән итеп халыҡты көлдөрөргә була, ҡайһы берәүҙәр шуны төшөнһөн ине. Хәйер, бәлки, улар быны үҙҙәре лә беләләр, әммә "халыҡтың һорауы буйынса" шул сығыштарын ҡат-ҡат ҡабатларға мәжбүрҙәр. Улайға китһә, ижадсы халыҡ артынан түгел, ә халыҡ ижадсы артынан эйәрергә тейеш түгелме ни?

### "Шаяниум" башланғысы

Ә бына башҡорт юморының бер матур сағылышы тип, һис шикһеҙ, "Шаяниум" юмор фестивален атарға була. Ун йыл элек "Шаяниум" Өфөлә тыуған бихисап башҡорт балаһына телебеҙгә, милли үҙаңыбыҙға яҡынайырға ярҙам итте. Бөгөнгө көндә Өфө урамдарында, йәмәғәт транспортында башҡортса һөйләшеүсе балаларҙы, үҫмерҙәрҙе, студенттарҙы осратыу ғәҙәти күренешкә әйләнде. Беҙҙең бала саҡта (мин дә Өфөлә тыуып үҫтем, "Шаяниум" мәктәбе үттем) был күренеш юҡ ине әле. Бөгөн "Шаяниум" тәрбиәләгән йәштәр, ижади коллективтарға берләшеп, Өфөлә үткән отҡорҙар һәм шаяндар фестивалдәрендә ҡатнаша, үҙҙәрен борсоған темалар, проблемалар, сәйәси, ижтимағи мәсьәләләр тураһында киң йәмәғәтселеккә фекерен белдерергә ынтыла. Ошоно иҫәпкә алып, КВН форматындағы концерттар үткәреү, йәш "квн"-сыларға оҫталыҡ дәрестәре үткәреү маҡсаты менән 2012 йылдың апрелендә "Башҡорт асыҡ КВН Лигаһы" исемле йәмәғәт ойошмаһын булдырҙыҡ та инде. 2012-2013 йылдарҙа беренсе миҙгел уйындары уңышлы үтһә, 2013-2014 йылдарҙа икенсе миҙгел бара. КВН хәрәкәтен Башҡортостаныбыҙҙың башҡа төбәктәрендә лә йәйелдереү - төп маҡсатарыбыҙҙың береһе. Тағы бер маҡсатыбыҙ - Башҡортостандың йыйылма командаһын туплап, Мәскәүҙәге Юғары Лигаға үткәреү. Быны өсөн иң әүәле авторҙар йәлеп итеү өҫтөндә эшләйбеҙ. Был юҫыҡта бер-ике автор түгел, ә тотош бер команда эшләргә тейеш. Әлегә заманса фекерләгән, башҡорт телендә лә, рус телендә лә берҙәй еңел ижад итә белгән, ҡала психологияһын аңлаған авторҙарға ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Бәлки, беҙҙең буласаҡ авторҙар бөгөнгө ҡала башҡорт мөхитендә формалашып килгән йәштәр араһынан үҫеп сығыр? Ҡала мөхитендә тәрбиәләнгән балалар юмор нескәлектәрен өйрәнеп үҫһен өсөн рус әҙәбиәтендәге "Белмәҫйән мажаралары" һымаҡ китаптар яҙыусы балалар әҙиптәре лә кәрәк, минеңсә. Ә баланың күңелен яулау - еңел эш түгел.

**Әйткәндәй...**

**19, 25 февралдә "Башҡорт асыҡ КВН Лигаһы"ның ярымфинал уйындары үтәсәк. Тамашалар М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында 19 сәғәттә башлана. Билеттар - таратыусыларҙа. Тел.: 8-927-928-30-04.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

**✓ Полковник Сыртланов полктың байрағын ҡулына алып, атакаға ташлана. Уның артынан һалдаттары эйәрә. Сыртланов байраҡ тотҡан килеш беренсе булып дошман окобының бруствերына килеп менә һәм шунда һәләк була.**

АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ

# РӘСӘЙ ӨСӨН БАШЫН ҺАЛҒАНДАР,

## йәки Беренсе донъя һуғышы геройы, башҡорт генералы Рауил Сыртланов тураһында



Һалдаттар атакаға бара. Беренсе донъя һуғышы.

Генераль штаб академияһын тамамлаусыларға Генераль штабта вазифа алыу өсөн бер йыл хәрби часта рота менән командалыҡ итеү шарт була. Ул "цензовое командование" тип аталған. 1905 йылдың декабрендә штабс-капитан Рауил Сыртлановты Ташкент ҡалаһына, 1-се Ташкент резерв батальонына рота командиры итеп ебәрәләр. Әммә бында ул 1 йыл ғына түгел, ике йыл йылдан ашыу хеҙмәт итә. Артабан да Сыртлановты Генераль штабҡа күсерергә ашыҡмайҙар, сөнки Урта Азия Рәсәй империяһының сәйәси йәһәттән бигүк тыныс булмаған төбәге иҫәпләнә. Бында Рәсәй менән Англияның мәнфәғәттәре киҫешә. Шуға ла Рәсәй Азия илдәренә үҙенең йоғонтоһон көсәйтер өсөн Англия менән көрәш алып бара. Тимәк, Генераль штаб башҡорт офицерына үтә яуаплы бурыс йөкмәтә. Ул да булһа, разведка эшен йәйелдереү. Мосолман төбәгендә башҡорт офицерына, әлбиттә, был эште башҡарып сығыуы күпкә еңелерәк була.

Рауил Сыртланов Урта Азияла 12 йыл хеҙмәт итә. 1907 йылдан 1-се Төркөстан армия корпусы штабында йомош буйынса обер-офицер вазифаһын үтәй. 1912 йылдың майында Сыртлановты Төркөстан хәрби округы штабының өлкән адъютанты вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләйҙәр. Ошо йылдарҙа ул разведка эше менән мәшғүл була. Сыртланов Фарсы илендә, Афғанстанда һәм Көнсығыш Төркөстанда агентуралы разведка ойоштороусыларҙың береһе була. Фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн 3-сө дәрәжәләге Изге Станислав һәм 3-сө дәржәләге Изге Анна ордендары менән бүләкләнә.

1912 йылдың сентябрендә Сыртлановты Мәскәүгә Алексеевский хәрби училищеһына уҡытыусы итеп ебәрәләр. Оҙаҡламай уға подполковник чины бирелә. Штабта хеҙмәт иткән һәр бер офицерҙы уҡытыусы итеп ҡуймайҙар бит. Тимәк, Генераль штабта Сыртлановтың хеҙмәтен, белемен, туплаған тәжрибәһен юғары баһалағандар. Был ваҡытта училище штатында 500 юнкер иҫәпләнгән. Курсанттар 4 ротаға бүленгән. Беренсе донъя һуғышы башланыу менән училищела юнкерҙар һаны 700-гә арттырылып, 1200 кеше булып китә. 1914 йылдың 12 июлендә училищены 200 кеше, 1 октябрҙә тағы 200 кеше, 1 декабрҙә 200 кеше тамамлай. 1915 йылдың 1 февралендә училище 300 офицер әҙерләп сығара; май, июль, сентябрь һәм октябрь айҙарында уны йәмғеһе 1200 кеше тамамлай.

Беренсе донъя һуғышының икенсе йылында Рауил Сыртланов үҙе лә фронтҡа китә. Ул 1915 йылдың октябрендә 22-се пехота дивизияһының штаб начальнигы итеп тәғәйенләнә. Был ваҡытҡа Сыртланов полковник дәрәжәһендә була. Өс ай дивизия штабын етәкләгәндән һуң, 1916 йылдың ғинуарында уны 42-се пехота дивизияһының 166-сы Ровнен пехота полкы командиры итеп ҡуялар. Хәҙер инде башҡорт офицеры Ярман (Герман) һуғышының алғы һыҙығында йөрөй.

1916 йылдың майында 400 меңлек Австро-Венгрия ғәскәрҙәре Рәсәйҙең союздашы Италия ғәскәрҙәрен ҡыйратып ташлай. Антанта илдәре (Рәсәйҙең союздаштары) Рәсәйгә ярҙам һорап мөрәжәғәт итә. Бының өсөн рус армияһы һөжүмгә күсергә тейеш була. 15 июнгә билдәләнгән һөжүм ваҡытын юғары командование 4 июнгә күсерергә мәжбүр була. Шуға ҡарамаҫтан, тәжрибәле сардар, Көньяҡ-көнбайыш фронттың баш командующийы генерал А.А.Брусилов уңышлы һөжүм планын төҙөй. Көньяҡ-көнбайыш фронт ғәскәрҙәре 300 километрға тиклем һуҙылған фронтта дошмандың оборона линияһын өҙөп, алға ташлана. Тарихҡа ул "Брусиловский прорыв" исеме менән ингән. Әммә Көнбайыш фронттың командующийы генерал Эверт һөжүм башлап, Көньяҡ-көнбайыш фронт ғәскәрҙәренә ярҙам итергә ашыҡмай. Булдыҡһыҙ генерал Көнбайыш фронттың һөжүмен 20 июнгә күсертә.

Фронт командующийы Эверт һөжүмгә етәкселек итеү бурысын 4-се армия командующийы генерал Рагозаға йөкмәтә. Ә Рагоза, 15-се корпус командующийы генерал Даниловтың дошмандың көсһөҙ позицияһына һөжүм итеү кәңәшен тыңламай, австро-немец ғәскәрҙәренең "Ферденанд мороно" тип нарыҡланған иң нығытылған позицияһына туранан-тура атакаларға ҡарар итә. Нығытылған линия Скробово һәм Дробышево ауылдары янында урынлашҡан була (хәҙерге Белорус Республикаһы). Бының өсөн ул 15-се әрме корпусына "Ферденанд моронон" төньяҡтан үтеп, алдаҡ һөжүм эшләргә бойора. Ә 9-сы (Р. Сыртлановтың полкы ошо корпус составында һуғыша), 10-сы һәм Гренадер корпустары дошманға тура һөжүм итергә тейеш була. Ә инде 25-се, 3-сө Себер һәм 3-сө Кавказ корпустары уларға ярҙам итәсәк, тигән план ҡорола. Дошман яғынан беҙҙең ғәскәрҙәргә 12-се австрий-венгр корпусы (15-се һәм өлөшләтә 9-сы корпус фронтында) һәм 2-се ике составлы пруссак корпусы (4-се армияның башҡа корпустарына ҡаршы) ҡаршы тора. Беҙҙең һөжүм итә торған 8 дивизияға яҡшы нығытылған, тимер сым менән уратылған, пулеметтар менән көсәйтелгән окоп, блиндаждарҙа дошмандың 6 дивизияһы ҡаршы тора.

Алдаҡ маневр өсөн тәғәйенләнгән 15-се корпус командиры 8 полктың 4-әүһен уңдағы пассив участкаға ҡуя, 2 полкты резервта тота, тик 2 полкты ғына һул флангтағы төп удар участкаһына тәғәйенләй. Әлеге ике полк ҡаһармандарса яуға ташланып, ҡанға бата. Әгәр ҙә генерал Рагоза үҙенең резерв корпустарын яуға ташлаһа, немецтарҙың 12-се корпусы туҙҙырылған булыр ине лә. Әммә Рагоза төп иғтибарҙы әлеге лә баяғы шул дошмандың нығытылған позицияларына туранан-тура бәреп инеүгә йүнәлтә. Был бурысты 9-сы корпус командиры Драгомиров етәкселегендәге удар группа (9-сы, 10-сы һәм Гренадер корпустары) үтәргә тейеш була.

Ҡанлы һөжүм алдынан өс көн дошман позициялары артиллерия тарафынан утҡа тотола. 20 июндең таңында 9-сы корпустың 5-се һәм 42-се дивизиялары, шул иҫәптән полковник Рауил Сыртланов командалыҡ иткән 166-сы Ровнен пехота полкы, үлемесле атакаға ташлана. Дошмандың иң ныҡ позицияһына һөжүм итеү бурысы Р. Сыртланов хеҙмәт иткән 42-се пехота дивизияһы иңенә төшә.

Полковник Сыртланов 166-сы Ровнен пехота полкының байрағын ҡулына алып, һалдаттарын әйҙәп, беренсе булып атакаға ташлана. Уның артынан һалдаттары эйәрә. Сыртланов байраҡ тотҡан килеш беренсе булып дошман окобының брустверына (окоп алдына өйөлгән тупраҡҡа) килеп менә һәм шунда һәләк була. Байраҡ тотоп, ут эсенә инеү ысын мәғәнәһендә ҡаһарманлыҡ түгелме һуң? Сыртлановтың батырлығы Матросов-Шәкирйән Мөхәмәтйәновтың ҡаһарманлығына тиң бит. Ә бит Сыртланов һәм уның һалдаттарына дошман окоптарына барып етеү өсөн миномет, пулемет һәм мылтыҡ уты аҫтында, электр тогына тоташтырылған тимер сым кәртәләрҙе үтергә тура килгән.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

**(Дауамы. Башы 6-сы һанда).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Ирҙәрҙең билбауҙары төрлө һәм улар, нигеҙҙә, өс төргә бүленә: *билбау, ҡаптырға* һәм *ҡәмәр.* Башҡорттар кейем өҫтөнән быуып йөрөгән билбауҙар ике төрлө. Иң киң таралғаны оҙонлоғо өс метр булған туҡыма (ҡомас, ситса, коленкор, бумазый). Туҡыманы өс-дүрт ҡат бөкләп, уны билгә ике тапҡыр урайҙар һәм остарын ҡыҫтырып тығып ҡуялар. Бик һирәк йөндән туҡылған билбау ҙа осрай. Уны башҡорттар үҙҙәре XIX быуатта уҡ эшләй һәм ул киң тарала. XX быуат башында ул таулы ерҙәрҙә һәм Урал аръяғы далаларында ғына осрай, башҡа урындарҙа бик һирәк була. Был билбау ҙа бик оҙон (3,5 метрға етә), әммә тар (киңлеге 15 сантиметр) була. Уны ҡара төҫтәге ептәрҙән туҡыйҙар, осона суҡ ҡуялар.

*Ҡаптырға* - тар (киңлеге 2-3 сантиметр) ҡайыш билбау, оҙонлоғо сағыштырмаса ҡыҫҡа (1,2 - 1,3 метр). Уның тышҡы яғына биҙәк баҫылған, бер башында ҡармаҡ кеүек таралғы, икенсе башында тишектәр була. Ҡайыштың уң яҡ ҡабырғаһына ҙур дүрткел *күн ҡаптырға* йәки *ҡалта* эленә (һүрәт).



Ә һул ҡабырғаһына ағастан яһалып, күн менән тышланған ҡындарҙа бысаҡ һәм ҡайыш һауытта ҡайраҡ эленә. Ҡайһы берҙә ҡайышҡа тыш яҡтан көмөшкә сүкеп биҙәк төшөрөлгән тимер айылдар ҡуйыла. Ҡаптырға һәр саҡ биҙәк баҫылған күн ҡапҡаслы, биҙәктең аҫҡы өлөштәре баҡыр купоросы менән уйҙырылып эшләтелә. Сумкала саҡматаш, ҡау һәм башҡа ваҡ әйберҙәр йөрөткәндәр. XX быуат башында ҡаптырғаның таралыу районы бик сикле була.

Ҡаптырғала ғына түгел, башҡа билбауҙарҙа ла башҡорттар һәр саҡ ҡында бысаҡ йөрөткән. Башҡорт бысаҡтарының бер үҙенсәлеге лә юҡ. Ә бына бысаҡ ҡындары төрлө һәм ҡыҙыҡлы. Иң киң таралғаны ике ағасты күн менән уратып эшләнгән ҡын (һүрәт).



Ҡайһы берҙә, һүрәттән күренеүенсә, улар баҡыр киҫәге менән көпләнгән һәм осонда тимер суҡтар менән биҙәлгән.

Ҡындың башҡа типтары бик һирәк осрай һәм улар ошо урынға ғына хас. Улар йә ағастан яһалып, ат тиреһе менән тышлана (һүрәт), йәиһә йүкәнән эшләнеп, туҙ киҫәктәре менән тышланған, үрелгән ҡындар ҙа осрай; ҡындар шулай уҡ туҙҙан да эшләнгән.



Бай башҡорттарҙа ҡасандыр ҡәмәр йәки ҡәмәр билбау модала булған. Улар ҡиммәтле еҙ гравировка менән биҙәлгән, ҡаптырмалары көмөштән, ҡаштары аҡыҡ, фирүзә кеүек таштар менән биҙәлгән (һүрәт).



Бик йыш бындай ҡушаҡтар тотошлайы менән сүкеп биҙәк яһалған һәм ҡаштары аҡыҡ, фирүзә менән биҙәлгән көмөш пластиналарҙан торған. (һүрәт).



Борон бындай ҡушаҡтар бик ҡиммәт баһаланған: шундай бер ҡәмәр өсөн байҙар яҡшы арғымаҡ йәки ике үгеҙ биргән.

*✓ Үҙем атай булғас, атайымды тағы ла нығыраҡ аңлай башланым. Хәҙер шул тиклем атайыма оҡшағым килә. Унын күп ваҡытын эштә үткәреүе ғаиләһен хәстәрләүҙән, беҙҙе етеш йәшәтергә тырышыуҙан икәнен дә төшөнәм.*



**Был быуын йәштәре - баш ҡалала милли мөхит булдырған, сәләмәт йәшәү рәүешен үҙ иткән, башҡорт сәнғәте, мәҙәниәте, күңел асыу өлкәһендә үҙенсәлекле эшмәкәрлек алып барған, башҡорт булыу уңышлы булыуҙың синонимы икәненә ышандыра, инандыра алған, башҡорт милләтенә улдар һәм ҡыҙҙар тәрбиәләгән быуын. Тап ошо быуын йәштәре бөгөн йәмғиәтебеҙгә "Дәүләт - беҙ ул!" тигән саҡырыу ташларға тейеш, тигән фекергә килеп, гәзитебеҙ биттәрендә улар менән ҡоролған әңгәмәләргә күберәк урын бирергә булдыҡ. Өфөлә йәшәүсе йәш ғаиләгә - Әлиә һәм Батыр ҒӘЛИМОВтарға тәүге һүҙҙе туғарып, улар алдына шундай һорауҙар ҡуябыҙ: глобалләшеү шарттарында телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы һаҡлап ҡалыуҙың иң ҡулайлы юлы дәүләттең кесерәйтелгән варианты - ғаилә эсендә икән, хәҙерге заман башҡорт ғаиләһе ниндәй булырға тейеш? Социологтар ғаилә институты кризисы тураһында саң ҡаҡҡанда, ғаилә - ул төп әхлаҡи ҡиммәттәрҙең береһе икәнлеген йәштәребеҙгә нисек төшөндөрөргә?**

# ТУҒАН ТЕЛЕМДӘ

## бер кемдең дә

**▸ Һәр кешенең йәшәү дәүеренең өс төп осоро бар: йәш кеше тәүҙә ата-әсәһенән бурысҡа ала, шунан уларға бурысын ҡайтара һәм аҙаҡ үҙе балаларына бурысҡа биреп тора. Әлеге мәлдә һеҙҙең бурыс ҡайтарған ваҡытығыҙ, шулай ҙа әңгәмәбеҙҙе был осорҙарҙың тәүгеһе, атай-әсәйҙән алған тормош һабаҡтары хаҡында һөйләшеүҙән башлап ебәрәйек.**

**Әлиә:** Мин Баймаҡ районы Ҡолсора ауылынан. Башланғыс синыфтарҙы тамамлаған мәлемдә колхоз тарҡалып, ауылда эшһеҙлек хөкөм һөргән ваҡыт ине, атай-әсәйемдәр ҡала еренә күсеп китергә хәл итте, мине Баймаҡ лицей-интернатына уҡырға бирҙеләр. Һис шикһеҙ, атай-әсәйем, олатай-өләсәйҙәр әхлаҡи, рухи тәрбиә бирҙе, ә интернатта ныҡлы белем алдым, йәмғиәт эшендә ҡатнашып, һәләттәремде үҫтерҙем. Үҙ фекерем барлыҡҡа килде, кешеләр менән аралашырға, башҡалар араһында үҙемде тоторға өйрәндем. Уҡыуға булған отҡорлоғом - атайымдан, ул бик уҡымышлы кеше, уҡытыусы булып эшләй. Әсәйем үтә тырыш, бөтөн нәмәгә өлгөр, кешене үҙенә йәлеп итә белә ине. Мин Башҡорт дәүләт аграр университетын тамамлар алдынан ғына мәрхүмә булып ҡалған әсәйемдән дә матур ыңғай сифаттар алдым. Батыр менән дуҫлаша башлағанда әсәйемә телефондан был турала әйткәйнем, ул, гел Батыр исемле улым булһын ине, тип хыялландым, тине. Ошо һуңғы һөйләшеүебеҙ васыят кеүек булды миңә...

**Батыр:** Мин Өфөлә үҫһәм дә, Баймаҡ ҡалаһында тыуғанмын. Әйткәндәй, Әлиә менән бер төбәктән булыуыбыҙ ҙа бер-беребеҙҙе аңлап йәшәргә булышлыҡ итә, сөнки унда мин үҙемдә булған сифаттарҙы күрәм. Атайым инженер, күберәк етәксе урындарҙа эшләгәнгә күрә, үҫкән саҡта уны өйҙә һирәк күрә инек. Әсәйем башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, эше шулай уҡ тынғыһыҙ булһа ла, ул беҙҙең эргәлә атайға ҡарағанда күберәк була ине. Шулай ҙа атайым менән әсәйем беҙҙе гел кәңәшләшеп, гел бер һүҙле булып тәрбиәләнеләр. Ә атайҙың абруйы, унын бер ҡараш ташлауы ла күңелгә ныҡ тәьҫир итә торғайны.

**Әлиә:** Беҙҙең ғаиләлә берәй ҙур мәсьәлә килеп сыҡһа - ҡайным, көндәлек ваҡ-төйәк, балалар тәрбиәһендә тыуған һорауҙарҙы ҡәйнәм хәл итә. Беҙ дуҫлашып йөрөгәндә Батырҙың ике туған апайының туйына барҙыҡ. Шунда буласаҡ ҡәйнәм менән ҡайныма ҡарап, сикһеҙ һоҡланғайным. Етәкләшеп, бергә генә йөрөйҙәр, бейейҙәр - минең өсөн бындай мөнәсәбәттәр ят ине, сөнки ауылда йәшәгән ғаиләләрҙә бер-береһенә йылы һүҙ әйткәндәрен ишетеү мөмкин булмаған хәл. Ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәр ҡайным һәм ҡәйнәмдеке кеүек булырға тейеш, тип уйлағайным шул саҡта. Минең уйҙарым Батырҙың ғаилә тураһындағы күҙаллауҙарына ла тап килде.

**Батыр:** Әлбиттә, халыҡ бушҡа ғына "Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр" тип әйтмәйҙер. Атай һәм әсәйҙең ыңғай тәрбиә өлгөһөнән тыш, ике апайымдың иғтибары һәм һөйөүе лә мул эләкте миңә. Хәҙер ҡыҙыбыҙ ошондай уҡ һөйөү ипкененд ә үҫһен, тип теләйем.

Үҙем атай булғас, атайымды тағы ла нығыраҡ аңлай башланым. Хәҙер шул тиклем атайыма оҡшағым килә. Унын күп ваҡытын эштә үткәреүе ғаиләһен хәстәрләүҙән, беҙҙе етеш йәшәтергә тырышыуҙан икәнен дә төшөнәм.

**▸ Илдә ижтимағи ҡоролош күптән үҙгәрҙе, әммә халыҡ һаман үҙгәрештәргә яраҡлашып китә алмай, аҙашып йөрөгән төҫлө. Шулай ҙа бөгөн үҙ-үҙеңә ышанғанда ғына нимәгәлер өлгәшеү мөмкин икәнлеген йәш быуын үҙ иңендә тойоп өлгөрҙө булһа кәрәк. Батыр, һин ғаилә башлығы булараҡ, ғаиләңдең матди хәлен нисек хәстәрләйһең?**

**Батыр:** Беҙҙең атай-әсәйҙәр быуыны гел дәүләт эшендә эшләп өйрәнгән, улар аңындағыса, кеше иртәнге туғыҙҙан кискe алтыға тиклем мотлаҡ эштә ултырырға бурыслы. Ә минеңсә, эш иң тәүҙә күңел ҡәнәғәтләнеүе алып килергә тейеш. Өфө дәүләт авиация-техник университетын тамамлағас, һөнәрем буйынса эшләп ҡараным, оҡшаманы. Әлбиттә, минең өсөн комфорт зонаһы була ала ине был эш урыны, көнө буйы ултырып, кисен, мин эштән арып ҡайттым, тип, тик ята ла ала инем. Минең, иң мөһиме, ижади һәләттәремде ҡулланырға мөмкинлек биргән эшкә тотонорға батырсылыҡ итеүемдең тағы бер сәбәбе - дуҫтарымдың заманға яраҡлашып, үҙ эштәрен асыуы. Хәҙерге көндә мин башҡорт клиптары төшөрәм, киләсәктә ҙурыраҡ проекттарға тотонорға иҫәп бар. Баҙар иҡтисады сәскә атҡан мәлдә бер урында тапаныуға ҡарағанда, ирекле йөҙөүгә сығыу күпкә уңышлыраҡ. Ғаиләле кеше булараҡ, яуаплылыҡ икеләтә ҙур, сөнки был ысул менән уларҙы тейешенсә ҡарай алмау ҡурҡынысын да онотмайһың. Әлегә килгән килем йорт һалыу өсөн етмәй, тимәк, был хыялды ла тормошҡа ашырыу өсөн тағы тырышырға кәрәк. Нисек кенә булмаһын, яратҡан эшем менән шөғөлләнеүемә шул тиклем ҡәнәғәтмен.

**Әлиә:** Дәүләт ҡоролошо, дәүләт сәйәсәте үҙгәрә икән, кешеләрҙең тормошҡа ҡарашы ла үҙгәрергә тейеш. Бөгөн дәүләттән нимәлер, әйтәйек, торлаҡ көтөп ултырыуҙың бер файҙаһы ла юҡ, уны булдырыу өсөн үҙеңә тырышырға кәрәк. Бөгөнгө йәштәр ошо яуаплылыҡты тоя. Әлбиттә, атай-әсәйҙәрҙең әйткән һүҙҙәрен, уларҙың позицияһын ихтирам итергә кәрәк, ләкин бер олоно, бер кесене тыңла, тиҙәр бит әле. Ололарҙы тыңлайһың да, бөгөнгө көнгә ярашлы итеп, үҙеңсә эш итәһең. Мөмкинлектәр сикләнмәгән, көс, йәшлек дыуамаллығы булған саҡта хыялдарынды тормошҡа ашырып ҡалырға кәрәк, сөнки хәҙерге көн - ул шундай көн, үҙеңә үҙең ярҙам итмәһәң, һиңә бер кем дә ярҙам итмәйәсәк.

**Батыр:** Яҡын кешемдең миңә ышаныуы, ярҙамы менән бәхетлемен. Әгәр ҙә Әлиә эшемә ҡаршы төшөп торһа, бер нәмәгә лә өлгәшә алмаҫ инем. Һәр эшемдә унын өлөшө бар, ҡайһы саҡта сценарий ҙа яҙа, уны клипҡа төшөрөп бөткәс, ҡарап сығып, төрлө кәңәштәр бирә. Атайым: "Етәр инде, улым, әйҙә, берәй яҡшы ғына дәүләт эшендә көсөңдө һынап ҡара", - тигәндә лә Әлиә минең менән фекерҙәш булыуын билгертеп, "Уға бит ошо эше оҡшай" тип, атайымды йомшарта. Етәксе кеше булараҡ, атайыма, әлбиттә, минең хыялдар артынан ҡыуыуымды күреү ҡыйындыр, уға ҡыйын булғас, миңә тағы ла ҡыйыныраҡ, сөнки атай-әсәйҙең фатихаһы бала өсөн бик мөһим. Киләсәктә ҙурыраҡ ижади эштәрем менән уларҙы ҡыуандырырмын һәм улар минең менән ғорурланыр, тип ышанам. Тик ваҡыт үтеүе, шул арала минең ныҡлап камиллашыуым, ә ата-әсәйемдең сабырлығы кәрәк.

**▸ Бөгөнгө глобалләшеү заманында милләтте һаҡлап ҡалыуҙың берҙән-бер юлы-башҡорт ғаиләһендә милли мәҙәниәт, милли йолалар йоғонтоһонда үҙ телеңдә һөйләшеп үҫкән балалар тәрбиәләүгә ҡайтып ҡала. Һеҙ ошо бурысты ни рәүешле тормошҡа ашыраһығыҙ?**

**Әлиә:** Электән ғаилә һәм милли мөхит милләтте һаҡлаусы булған. Борон дәүләт булмағанда ла башҡорт булған, үҙ телендә һөйләшкән һәм быны ул үҙ мөхите эсендә башҡарған. Хәҙер ҙә туған телемдә һөйләшеү өсөн миңә бер кемдең рөхсәте лә, махсус закондар ҙа кәрәк түгел, иң мөһиме - теләк кәрәк. Бөгөндән һин тын алырға тейеш түгелһең, тигәндән генә кеше тын алмай башламай ҙа инде. Үҙ телеңдә һөйләшеү, үҙ милли мөхитең һиңә һулаған һауаң кеүек үк тәбиғи төшөнсә.

Әгәр һин башҡорт икәнһең, бөтөн булмышың менән башҡорт булырға тейешһең. Батыр - башҡорт, мин - башҡорт, олатай-өләсәйҙәр башҡорт, йырҙарын йырлап, һамаҡтарын һамаҡлап, ейәнсәрҙәрен тап үҙебеҙсә тәрбиәләйҙәр. Тимәк, Әмилә лә, унын балалары ла башҡорт буласаҡ. Иң мөһиме, башҡортлоҡ күңелдә булһын.

**Батыр:** Милләткә ҡағылышлы бер генә мотлаҡ талап бар - ул үҙ милләтеңдән булған кешегә кейәүгә сығыу, үҙ башҡортоңдо кәләш итеп алыу. Ваҡытында әсәйем миңә, киленем башҡорт булһын, тип әйтә ине, мин дә балаларыма ошо уҡ талапты ҡуясаҡмын. Ҡалғанын үҙ миҫалыңда, үҙ өлгөңдә тәрбиәләйһең. Быуындар араһындағы конфликт тәбиғи әйбер, балаға башҡортса йыр тыңла, башҡортса тапшырыуҙар ҡара, милли баҫмаларҙы уҡы, башҡорт спектаклдәренә йөрө, тип, тылҡып торһаң, ул ҡаршылашып, киреһен эшләй башлаясаҡ. Ә бына үҙеңә эйәртеп, башҡорт сараларына йөрөтһәң, үҙ милләтенән булған тиҫтерҙәре менән аралашһа, һинең өлгөңдә гәзит-журнал уҡып, "Тамыр" телеканалын ҡарап үҫһә, был мөхиткә ул үҙе үк тартыласаҡ.

*Милләткә ҡағылышлы бер генә мотлаҡ талап бар - ул үҙ милләтеңдән булған кешегә кейәүгә сығыу, үҙ башҡортоңдо кәләш итеп алыу. Ваҡытында әсәйем миңә, киленем башҡорт булһын, тип әйтә ине, мин дә балаларыма ошо уҡ талапты ҡуясаҡмын. Ҡалғанын үҙ миҫалыңда, үҙ өлгөңдә тәрбиәләйһең. Быуындар араһындағы конфликт тәбиғи әйбер, балаға башҡортса йыр тыңла, башҡортса тапшырыуҙар ҡара, милли баҫмаларҙы уҡы, башҡорт спектаклдәренә йөрө, тип, тылҡып торһаң, ул ҡаршылашып, киреһен эшләй башлаясаҡ. Ә бына үҙеңә эйәртеп, башҡорт сараларына йөрөтһәң, үҙ милләтенән булған тиҫтерҙәре менән аралашһа, һинең өлгөңдә гәзит-журнал уҡып, "Тамыр" телеканалын ҡарап үҫһә, был мөхиткә ул үҙе үк тартыласаҡ.*

**Әлиә:** Был фекер менән тулыһынса килешәм. Лев Толстойҙың бала тәрбиәләүгә ҡағылышлы "Яҡшы булығыҙ, һис юғында, яҡшы булырға тырышығыҙ, сөнки үҙ өлгөң - иң дөрөҫ ысул", тигән һүҙҙәре бар. Башҡортса йырлаһаң, башҡортса бейеһәң, башҡортса күңел асһаң - дөрөҫ була, тигән уйҙы һеңдерһә һәм был үҙенең күңеленә ятып торһа, бала ят мәҙәниәт йоғонтоһонан азат буласаҡ. Әле ҡыҙыбыҙға йәш тә һигеҙ ай, теле асылып килгән мәле, унын менән тик башҡортса ғына аралашабыҙ. Атаһы ҡурайҙа уйнағас, бейегәс, ҡурай көйө ишетелеү менән башҡортса баҫып тороп бейей башлай. Үҙем дә сәнғәттән йыраҡ торған кеше түгелмен. Концерттарға, башҡортса КВН-ға алып йөрөйбөҙ, уға бик оҡшай. Дуҫтарҙың балалары менән бер осорҙа тыуғанлыҡтан, уларҙы бер балалар баҡсаһына бирергә хыялланабыҙ.

Яңы йыл байрамы ваҡытында "Алма" антикафеһында Ҡыш бабай, Ҡарһылыу саҡырып, балаларға байрам ойошторҙоҡ. Интернет аша барлыҡ башҡорт ғаиләләренә оран ташлаһаҡ та, тәүге тапҡыр үткәрелгән сараға 11 бала ғына йыйылды. Беҙ - башҡорт йәштәре, танышайыҡ, бергә булайыҡ, аҙаҡтан балаларыбыҙ ҙа аралашып йәшәр, тигән уйҙабыҙ инде.

**Батыр:** Милли мөхит тигәндәй, беҙҙең барлыҡ яҡын дуҫта-

# ҺӨЙЛӘШЕР ӨСӨН...

## рөхсәте кәрәкмәй



***Бөгөнгө заманда айырылышҡан, бер-береһе менән аңлаша алмай йәшәгән ғаиләләр күп, уларҙың барыһын да күреп-белеп йөрөйһең. Иҫәр - үҙенең, аҡыллы башҡаларҙың хатаһында өйрәнә. Таныш ғаилә иштәренең хаталарын күреп, ни өсөн мөнәсәбәттәрен яйлай алмағанлыҡтарына яуаптар табам да, үҙем өсөн һабаҡ алам. Иң тәүҙә, ир менән ҡатын һөйләшеп, аңлаша белергә тейеш. Иреш-талашты һәр кем ойоштора ала, матур итеп һөйләшә белеү кешенең яҡшы сифаттарының береһе. Үпкәләп, һөйләшмәй йөрөү, тауыш ҡуптарып, яман һүҙҙәр менән әрләшеү мөнәсәбәттәрҙе ҡатмарлаштыра ғына. Үҙем әрләшә лә белмәйем, ниндәйҙер күңелһеҙ хәл килеп тыуа икән, бер нәмә лә әйтә алмай, үҙемә йомолам да ҡуям.***

...рыбыҙ ҙа сәләмәт йәшәү рәүеше алып бара. Иҫерткес эсемлектәрһеҙ табындар ойоштораобыҙ, башҡортса уйындар уйнайбыҙ, әүҙем ялды ла онотмайбыҙ. Быны күреп үҫкәс, балалар ҙа беҙҙең юлды дауам итәсәк. Шуға ла баланды тәрбиәләйем, тиһәң, иң тәүҙә үҙеңде тәрбиәләргә кәрәк.

**Ғаилә тормошондағы һәр көн, һәр ваҡиға ғаиләнең нигеҙен нығыта йә ҡаҡшата. Һеҙ үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе нисек ҡораһығыҙ?**

**Әлиә:** 4-се курста уҡып йөрөгәндә әхирәтем менән "Студент язы"на барҙыҡ. Сәхнәлә ҡурайҙа уйнайҙар, бейейҙәр. Тамаша шул тиклем елкендерҙе, сығыш яһаусы егеттәргә ҡарап, күңелдә "Их, минең тормош иптәшем ҡурайҙа уйнаған, бейегән ысын башҡорт булһа ине", тигән ихлас теләк уянды. Оҙаҡ та үтмәй, башҡорт дискотекаһында Батыр менән таныштыҡ. Уның атлап йөрөүҙәре, бейеүҙәрен күреп, иҫем китте, минең хыялымдағы һәм ысынбарлыҡтағы ике образ тап килде. Ғөмүмән, ғаилә тормошонда ир менән ҡатын бер-береһен игәп, ҡәнәғәтһеҙлек белдереп ултыра икән, был дөрөҫ булмаясаҡ. Ғаилә нигеҙендә яратыу һәм тормоштағы уртаҡ маҡсаттарҙы дөрөҫ аңлау ята.

Бөгөнгө заманда айырылышҡан, бер-береһе менән аңлаша алмай йәшәгән ғаиләләр күп, уларҙың барыһын да күреп-белеп йөрөйһең. Иҫәр - үҙенең, аҡыллы башҡаларҙың хатаһында өйрәнә. Таныш ғаилә иштәренең хаталарын күреп, ни өсөн мөнәсәбәттәрен яйлай алмағанлыҡтарына яуаптар табам да, үҙем өсөн һабаҡ алам. Иң тәүҙә, ир менән ҡатын һөйләшеп, аңлаша белергә тейеш. Иреш-талашты һәр кем ойоштора ала, матур итеп һөйләшә белеү кешенең яҡшы сифаттарының береһе. Үпкәләп, һөйләшмәй йөрөү, тауыш ҡуптарып, яман һүҙҙәр менән әрләшеү мөнәсәбәттәрҙе ҡатмарлаштыра ғына. Яңыраҡ бер танышым "Күҙ алдына килтерәһеңме, беҙ уның менән бер аҙна дуҫлашабыҙ, бер тапҡыр ҙа әрләшкәнебеҙ юҡ", тип һөйләй. Ғаилә ҡормағандар, бүлешер нәмәләре лә юҡ, нимә тип әрләшергә мөмкин икән, тип хайран ҡалдым. Үҙем әрләшә лә белмәйем, ниндәйҙер күңелһеҙ хәл килеп тыуа икән, бер нәмә лә әйтә алмай, үҙемә йомолам да ҡуям.

**Батыр:** Ғаилә тормошо, сериалдарҙа күрһәтелгәнсә, талашыуҙарҙан, ярашыуҙарҙан тормай, уның талғын ғына, ярҙарынан ташмай ғына ағыуы хәйерле. Тормош булғас, төрлө ваҡыттар була, әгәр берәй аңлашылмаған хәл килеп тыуһа, бер-беребеҙгә, мин һине яратам, тиһәк, үпкәләүҙәр үтә лә китә. Бар нәмәнең нигеҙендә мөхәббәт һәм ихтирам ята. Проблемаға икенсе яҡтан ҡарай белеү ҙә кәрәк, ул саҡта был хәлдең бөтөнләй ваҡ нәмә икәнлегенә төшөнәһең. Әйтәйек, элек төрлө сараларға гел бергә йөрөй инек, хәҙер икебеҙҙең береһе бала менән ултырырға тейеш. Шуға ла үҙ-ара килешәбеҙ ҙә, концерт-спектаклдәргә сиратлап йөрөйбөҙ һәм бынан бер ниндәй ҙә трагедия эшләмәйбеҙ.

**Дуҫтарығыҙ менән үҙенсәлекле мөхит булдырғанһығыҙ, бынамын тигән ғаиләгеҙ бар, матди яҡтан да аяҡҡа баҫырға тырышаһығыҙ. Хәҙерге йәштәрҙең ғаилә ҡорорға ашыҡмауын иҫәпкә алып, улар араһында уңышлы кеше ғаиләле булырға ла тейеш, тигән өгөтләүҙәр алып бармайһығыҙмы?**

**Әлиә:** Һәр ғаилә үҙе уникаль күренеш. Беҙҙең ғаилә сценарийы икенсе ғаилә өсөн тап килмәйәсәк, сөнки һәр кеше үҙенсә йәшәй, һәр кемдең ғаилә тураһында үҙ ҡарашы, үҙ маҡсаты бар. Матур йәшәүебеҙ менән туғандарҙы, дуҫтарҙы ҡыуандырһаҡ, беҙгә ҡарап, башҡалар өлгө алһа - беҙҙең өсөн шул етә. Бына беҙ шулай йәшәйбеҙ, һеҙ ҙә шулай йәшәгеҙ, тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ ине.

**Батыр:** Аңлы рәүештә сәләмәт йәшәү рәүешен һайлағас, бер ваҡыт эргәлә дуҫтар кәмене. Сөнки уларға беҙҙең менән күңелле түгел ине. Беҙ эсмәйенсә лә күңел асып булғанлығын күрһәткәс, уларға ла аңлау килде. Беҙҙең ғаиләбеҙгә һоҡланып, башҡаларҙа ла ғаилә ҡороу, балалар тәрбиәләү теләге уяна икән, был бик яҡшы.

**Әлиә:** Кешегә күрһәтеү өсөн йәшәү ҙә дөрөҫ түгел. Үҙең бәхетле булһаң, һинең өсөн барыһы ла яҡшы булһа, иң мөһиме шулдыр. Шул саҡта бәхетле булыуыңды башҡалар ҙа тоясаҡ. Күптәр ғаилә эсендә ниндәйҙер проблема килеп сыға икән, кеше һүҙенән ҡурҡып, үҙҙәрен бәхетле итеп күрһәтергә тырыша. Бер-береһен яратмаһа ла, кеше һүҙенән ҡурҡып, ғүмергә үҙҙәрен бәхетһеҙ итеүселәр ҙә була бит.

Бер хикмәт бар бит әле. Ир кеше ҡатынын ишәгенә атландырып, үҙе уның эргәһендә йәйәүләп китеп бара, ти. Кешеләр: "Алйот ир, ҡатынын ултыртып, үҙе йәйәү китеп бара", - ти икән. Ир үҙе ишәккә ултырып, ҡатыны йәйәү китеп барһа: "Алйот ир, ҡатынын ултыртмай, үҙе ултырып алған", - тиҙәр. Икеһе лә йәйәүләп барһалар: "Ишәктәре бар, ни эшләп йәйәү китеп баралар икән?" - тип шыбырлашалар. Икәүләп ултырһалар, ишәкте йәлләп бер булалар. Шулай итеп, яҡшы уйлы кеше һинең турала - яҡшыны, яманы - яманды һөйләй. Кеше һүҙенән өҫтөн булыу ҙа, үҙ иманыңдан, үҙ юлыңдан тайпылмау өсөн көслө булыу ҙа кәрәк.

**Батыр:** Кешегә төркөм психологияһы хас әйбер, әммә уны кирегә түгел, ә ыңғай йүнәлешкә бороп ебәреү кәрәк. Мәҫәлән, кемдәрҙер айыҡ туй үткәргән, әйҙә, беҙ ҙә шулай итәйек. Йәки, улар балаларын башҡорт төркөмөнә биргән, беҙ ҙә ошолай эшләйек. Йәгни, был тойғоно милләтте үҫтереүгә йүнәлтергә лә була. Һуңғы йылдарҙа балаларына матур, мәғәнәле башҡорт исемдәре ҡушыусылар күбәйҙе бит. Ҡыҙыбыҙға сит исем биреүҙе күҙ алдына ла килтермәнек, Әмилә тигән, "эшлекле", "егәрле" мәғәнәһен белдергән исем ҡуштыҡ. Баш бала, егәрле булһын, тинек. Исемен аҡлай былай, әсәһе иҙән йыуһа, ул да йыуа, һауыт-һаба теҙешә, тыймайбыҙ, өйрәнһен әйҙә. Теләге бар саҡта тыймай, дөрөҫ йүнәлеш биреп торһаҡ, аҙаҡтан ҡыҙыбыҙ ҙа рәхмәтле булыр, моғайын. Шулай ҙа бөтөнләй тыймайҙар, тип уйламағыҙ, ярамаған нәмәне аңлатырға тырышабыҙ. Баланы иркәләп кенә торғандан файҙа булмаясаҡ.

**Әлиә:** Батыр һәр баланың хыялында булған атайҙыр, тип уйлайым. Әмилә тыуғас, ике аҙна эшләне лә, үҙ эшен асып ебәрҙе. Хәҙер уның гел эргәбеҙҙә булыу өсөн ваҡыты бар. Ҡыҙыбыҙ "атай" тип өҙөлөп тора, тыйһам йә нимәнелер эшләргә рөхсәт итмәһәм, "атай" тип Батырға йүгерә. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә береһе баланы әрләһә, икенсеһе йәлләй, ә беҙ бер һүҙлебеҙ. Ҡыҙ кешегә атай яҡыныраҡ була, ул тормош иптәшен атаһына оҡшатып һайлай. Ҡыҙым атаһына оҡшаған кешегә кейәүгә сыҡһа, мин бәхетле буласаҡмын.

**Бәләкәй ғаилә - ул бәләкәй дәүләт, уның киләсәген нисек итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**Батыр:** Йорт һалыу хыялын әйттек инде, атайҙан өйрәнгән ҡаҙаҡ ҡағыу, агас юныу кеүек һөнәрҙәремде тормошҡа ашырырға ниәтләнеп йөрөйөм. Балалар һанына килгәндә, ике-өс бала үҫтерергә теләйем. Иң мөһиме, балаларҙы рухлы, был заманда аҙашып ҡалмаҫлыҡ итеп тәрбиәләү кәрәк. Һөнәр алыуға килгәндә, үҙем ҡасандыр сәнғәт юлынан китергә теләгәйнем, "Ҡурайҙа үҙең өсөн уйнарһың, егет кеше инженер булырға тейеш", тигән кәңәше өсөн атайыма рәхмәтлемен. Үҙемдең балаларыма ла дөрөҫ йүнәлеш бирә алһам ине.

Балаларҙың һәр береһен мотлаҡ рәүештә торлаҡ менән тәьмин итеү ҙә минең атайлыҡ бурысым буласаҡ. Бына шундай хыялдар йөрөтәм күңелдә, уларҙы яйлап ысынбарлыҡ итеп бөтөрбөҙ, тип ышанам. Шулай ҙа мин бөгөнгө тормошом менән дә иҫ киткес ҡәнәғәтмен. Хатта артыҡ бер нәмәне лә үҙгәртергә теләмәҫ инем. Атай-әсәйҙәребеҙ, туғандарыбыҙ, дуҫтарыбыҙ менән мөнәсәбәттәребеҙ яҡшы. Янда улар булғанда, бер нәмә лә ҡурҡыныс түгел.

**Әлиә:** Һәр дәүләттең үҙенең территорияһы булырға тейеш, шуға ла һәр ғаиләнең үҙ йорто булыу мотлаҡ. Һин нисек кенә юғары зауыҡлы, мәҙәни кеше булма, көнкүрештәге проблемалар кешене ваҡландыра.

Һәр ир кеше ир бала тураһында хыяллана, Алла бирһә, Батырға ул бүләк итергә теләр инем. Һәр бала үҙ бәхете, үҙ ризығы менән тыуа, шуға йәшәргә урын, аҡса юҡ, тип, бала һөйөү ҡыуанысын аҙаҡҡа ҡалдырмаҫҡа кәңәш итәм йәштәргә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ғәлимовтарҙың ғаиләһенә ҡарап, йәштәр - дәүләт эсендә барған социаль үҙгәрештәргә тиҙ арала яраҡлашып китә алған йәмғиәттең иң "мобиль" өлөшө, тип бушҡа әйтмәгәндәренә төшөнәһең. Иң мөһиме, бөтөн илдә яңы социаль мөнәсәбәттәр формалашыуы элекке ҡиммәттәрҙе юҡҡа сығарыу шарттарында барғанда, башҡорт йәмғиәтендә өлкәндәр тәжрибәһе, өлкәндәр аҡылына таянып, киләсәген үҙе булдырып йәшәгән йәштәребеҙ бар. Улар ишәйһен, иншалла! "Дәүләт - беҙ ул!" тигән рубрикабыҙҙа фекер алышырға саҡырабыҙ ошондай матур йәш ғаиләләрҙе. Үҙегеҙ тураһында белгертегеҙ, шылтыратығыҙ. Һеҙҙең өлгө - башҡа йәштәр өсөн кәрәк икәнен онотмағыҙ, зинһар.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Берәүҙәр ҡаса. Икенселәр баҫтыра. Берәүҙәр ҡасыу юлы менән ғүмерен һаҡларға теләй. Икенселәр ҡасҡандарҙы баҫтырып тотоп, ғүмерен һуҙырға теләй. Йүгермәйһең икән, йәшәмәйһең...***






Өйөрҙә Тертелдәктән йәшерәк бәрәстәр тулып йөрөһә лә, ниңәлер, өләсәһе фәҡәт Тертелдәкте яҡын күрә. Ярата. Тышҡы ҡиәфәттәре буйынса игеҙәге Тырт-Мырт менән улар бер яғы менән дә айырылмай. Айырма шунда ғына: Тырт-Мырт һауалыраҡ, тиҙ генә үсегеп бара, һүҙ күтәрмәй, әллә шуға инде өләсәләре Һөтләкәй уға һәр ваҡыт орошоп өндәшә. Ә бына Тертелдәкте ул башҡа бәрәстәрҙән айырып ҡарай. Бер йәшлек сағында хатта үҙенең яңы тыуған бәрәстәренән йәшереп кенә бер имсәген Тертелдәккә имеҙеп йөрөнө. Өләсәһенең ҡаймаҡтай ҡуйы һөтөнөң татын бик яҡшы хәтерләй Тертелдәк. Был хәл күпме дауам итер ине инде, ейәнсәрен имеҙеп йөрөгән Һөтләкәйҙе күреп ҡалған ҡартатаһы Таштояҡ мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйып, алдағы йәй башында ҡоралайҙарҙың йәшәү ҡануны буйынса яңы йәшен тултырған Тертелдәк менән Тырт-Мыртты, тағы ла бер нисә йәш ҡоралайҙы, эш боҙоп тотолған өлкән ҡатыны Һөтләкәйҙе өйөрҙән ҡыуып уҡ сығарҙы. Өйөрҙән генә ҡыуһа - бер асыу, маңлайы менән ағастарға ышҡып сиген билдәләгән биләмәһенән ситкә үк баҫтырып сығарып ебәрҙе. Ҡаршылашып маташҡайнылар, Таштояҡтың тояҡтары ғына түгел, мөгөҙҙәре лә таш кеүек ҡаты, һөңгө кеүек осло. Өйөр башлығынан һөҙөлөүҙең нимә икәнен Һөтләкәй бик яҡшы белә. Үҙе лә уның мөгөҙөнөң ҡатылығын һәм үткерлеген үҙ ҡабырғаларында һынап ҡараған бар. Шуға күрә Һөтләкәй иренең үҙен өйөрҙән һәм биләмәнән ҡыуыуына артыҡ үпкәләмәне, яҙмышына өнһөҙ буйһоноп, ейәнсәрҙәрен һәм бүләсәрҙәрен эйәртеп урман төпкөлөнә китеп, үҙҙәре һымаҡ уҡ йола үтәп өйөрҙән китеүсе башҡа йәндәштәрен табып, улар менән йәйоҙоно донъя ҡыҙырыуҙарын беләләр. Һөтләкәй бындай үҙенсәлекле сәйәхәткә тәүге тапҡыр сыға, сөнки ул быйыл тәүге тапҡыр ҡыҫыр ҡалды.

Әҙәмдәрҙең йәйләүгә сығыуына оҡшағайны ҡоралайҙарҙың был йәйге сәйәхәте. Өйөрҙән уларҙы ситнәткән йә яратмаған өсөн ҡыумайҙар. Йола буйынса өйөрҙәге йәш бикәләрҙең быуаҙ икәнлеге билдәле булғас та, бер йәштән өлкән барлыҡ йән эйәһе өйөрҙө һәм биләмәне ташлап китергә, көҙгә тиклем үҙ йүнен үҙе күреп йәшәп торорға тейеш. Тәбиғәт ғәли йәнәптәре ҡоралайҙарҙы шулай итеп яралтҡанға күрә үтәлә был йола. Йәғни инә ҡоралай менән атаның барлыҡ иғтибары уларҙың затын дауам итер, донъяға яралыр йәндәргә бағышланырға тейеш был йәйге осорҙа. Инә ҡоралайҙың бауырындағы яралғыға тынығлыҡ та, әсәһе аша күскән яҡшы ҡан, бының өсөн таҙа һыу ҙа, шифалы һутлы үлән дә кәрәк. Бына шуның өсөн, бәрәстәр һау килеш донъяға яралһын өсөн дә башҡалар был саҡта өйөрҙән генә түгел, хатта биләмәнән дә ситкә сығып йәшәп торорға бурыслы. Был инә ҡоралайҙарҙың гоманлы сағындағы иң гуманлы ҡануны. Әҙәмдәр ҙә ошо ҡанун буйынса йәшәһә ине. Төҙтәкәләр ҙә ҡоралайҙарҙан күреп микән, бер мәл "Бөтә яҡшы нәмә - балаларға!" тигән девиз менән йәшәп ҡараны ҡарауға. Әммә был һүҙҙәр ҡоро лозунг булыуҙан уҙманы, сөнки әҙәмдәрҙең күп кенә ата-әсәләре "яҡшы нәмә"не үҙенең ҡулына эләктерер өсөн тупылдатып балалар тапты. "Яҡшы нәмәләр" иһә, балаларға тәғәйенләнһә лә, башҡа кәйеф-сафа ҡороу маҡсатында сарыф ителде. Балаларҙың һаны артҡан һайын, ҡарауһыҙ ҡалған етемдәр, балалар йорттары һаны ла күбәйҙе...

Уның ҡарауы, йәйоҙоно ситтә йөрөп, йәш ҡоралайҙар үҙҙәре менән донъя гиҙеүсе өлкәндәрҙән йәшәргә, иң мөһиме, йыртҡыс хайуандарҙан һаҡланырға өйрәнә, тормош мәктәбе үтә. Ҡайһы саҡта улар аяныслы хәлдәргә лә тарып ҡуя. Ни тиһәң дә, бүреләрҙең башын яра тиберлек Таштояҡ ҡартаталары үҙҙәренең тыуған биләмәһендә заттарының яңы ағзаларының имен-аман донъяға килеүен тәьмин итеп йөрөй шул. Үткән йәйҙә шулай йәйләү ҡыҙырып йөрөгәндәрендә ҡоралайҙар һаҡһыҙлыҡ күрһәтеп, һунарсыларҙың башмаҡтай эттәренә осрап, саҡ-саҡ үлемдән ҡалды. Ыржайҙарҙан да хәтәрерәк ине уларҙың һунар эттәре. Дөрөҫөрәге, уларҙы өләсәләре Һөтләкәй әжәл тырнағынан алып ҡалды. Йыртҡыстарҙан елдең түбән яғына, тау осраһа, тау үренә табан ҡасырға кәрәклеген шунда аңланы Тертелдәк. Әгәр ҙә ҡоралайҙар тау үренә табан ынтылһа, уны бер йыртҡыс йәнлек тә, иң йүгерек һаналған һунар эттәре лә ҡыуып етә алмай. Ни өсөн тигәндә, илектәрҙең артҡы тояҡтары оҙон, алғылары ҡыҫҡараҡ булыуы тау үренә табан атылған уҡтай осорға мөмкинлек бирә. Һөтләкәй уларҙы тау үренә әйҙүкләп, бурҙайҙарҙың ауыҙынан йолоп ҡалды.

Йәйләүҙә йөрөүсе йәш ҡоралайҙар ара-тирә тыуып үҫкән биләмәләренең сигенә барып сыҡҡанда, ҡартаталарының баш осондағы үткер мөгөҙөнә күҙ һалып та китер булды. Бының да үҙенә күрә әтнәкәһе бар. Әгәр ҙә Таштояҡтың һөңгө-мөгөҙҙәре урынында юҡ икән, был хәл шуға ишара: өйөргә әйләнеп ҡайтырға була, бәрәстәр донъяға яралған. Тиҙҙән ер өҫтө ҡар менән ҡапланасаҡ һәм уларҙың заты тағы ла бер өйөр булып донъя гиҙеп йөрөйәсәк. Ҡышлаҡҡа ҡайтыу ҙа үҙенә күрә оло байрам. Барыһынан бигерәк донъяға яралған сыбар бәрәстәрҙе күргәндән һуң тыуған ашҡыныуҙар, уларҙың тәүге яһаған аҙымдарына ҡыуанып һикерәндәүҙәр. Өйөрҙәге ата-әсәләре лә йәйләүҙән ҡайтыусы бәрәстәрен һағынып өлгөрә был саҡта. Бындай тойғонан хатта донъялағы иң ҡырыҫы һәм уҫалы булып тойолған ҡартаталары Таштояҡ та азат түгел. Ул хатта был саҡта тәртип боҙоусы кескәй тоҡомдаштарына яза бирерлек хәлдә түгел. Был мәлдә туҡал ҡалған Таштояҡтың иң йыуаш көндәре башлана. Тап шул саҡта бәрәстәргә, үҫмерҙәргә шашынып алырға ла форсат тыуа. Был шашыныуҙарға йәйге танышыуҙарҙан һуң ҡауышыуҙар, мөхәббәт уйындары ялғана. Әммә ергә ҡырпаҡ ҡар төшөп, өйөр башының яңы мөгөҙҙәре үҫеп сыҡҡас, өйөрҙә тағы ла әүәлгесә тәртип урынлаша. Ҡоралайҙар тағы ла һалдаттар ише бер рәткә теҙелеп йөрөй башлайҙар.

* * *

Һөтләкәй менән Тертелдәктең, өләсәй менән ейәнсәрҙең ҡараштары осрашыуға тағы ла бер секунд ваҡыт үтте. Шул тиклем оҙон, көтөп түҙемең бөтөрлөк, түҙеп үҙәгең өҙөлөрлөк ваҡыт арауығы. Шул мөҙҙәт эсенә әллә күпме наҙ, яҡтылыҡ, йылылыҡ, миһырбанлыҡ, эскерһеҙлек, илаһилыҡ, туғанлыҡ хисе һыя. Ҡайһы бер тере йән эйәләре ғүмер буйы йәшәп тә, был тойғоларҙы кисереү генә түгел, былар хаҡында уйлау ғына түгел, ғөмүмән, бындай төшөнсәләрҙең барлығын да белмәйҙәр. Туғанлыҡ, ҡан тартыу көсө аң менән аңлай һәм аңлатып бирә торған төшөнсәләр түгел шул. Гүйә, ошо мәлдә Һөтләкәй менән Тертелдәк тәбиғәттең башланғысы һәм дауамы булып, бер миҙгелдә бер йәнгә ойошто кеүек.

Бындай ҡараш йүгертеүҙәр, алан-йолан ҡарауҙар, тертелдәүҙәр уларҙың ҡанында. Тертелдәү буйынса барыһын да уҙҙырғаны өсөн дә өләсәһе уға Тертелдәк исемен биргәйне бит. Бәрәстәр, йәш һәм үҫмер ҡоралайҙар ниндәй генә хәлгә ҡалғанда ла, өлкәндәрҙең хәрәкәттәрен ҡабатлап, уларҙың эҙенә баҫып, хәүеф килеп тыуған урындан сығырға, йыртҡыстар тырнағынан ҡотолорға тейеш. Әгәр ҙә улар өлкәндәрҙән күҙ яҙҙырып, уларҙың хәрәкәтен ҡабатламай, саҡ ҡына үҙаллы хәрәкәт иттеме, ыржайҙар был хәлде тиҙ арала күреп ҡалып, йәш ҡоралайҙы өйөрҙән айырырға, ситкәрәк ҡайырырға тырышасаҡ. Өйөрөнән айырылған йәш илек күҙ асып йомған арала бүреләрҙең ҡорбанына әүерелә. Йәш кәзә тәүҙә самаһыҙ әүҙемлек күрһәтеп сәбәләнә, урынһыҙға ҡапыл туҡталып ҡала, ҡайһы яҡҡа ҡасырға белмәй, тыбыҙыҡлап үрһәләнә һәм ошо рәүешле үҙен уратып алған ыржайҙарҙың аҙау тештере араһына үҙе үк һикереп тиерлек барып инә. Шунан башлана ла инде ыржайҙарҙың ҡан туйы. Ул туйҙың нисек барыуына һәм тамамланыуына ҡорбан булыусы йәнлек шаһит була алмай шул.

Бер, ике, өс!

Кәзәкәйҙәр берҙәм һулыш алып, берҙәм ынтылыш менән Таштояҡ һикергән яҡҡа табан ырғыны. Барыһы ла тәүге һикереш яһағандан һуң барып төшөр урындарының ниндәй булырын да абайламаны, күҙҙәрен йомоп һыуға сумған әҙәм ише, аҙағы ни менән барып бөтөрөн белмәгән яҡҡа ҡуҙғалды. Был халәт уларҙың өйөр башлығына сикһеҙ ышаныуҙан килә торғандыр. Күрәләтә ут эсенә, ыржайҙарҙың аҙау тешенә алып барып индермәҫ әле Таштояҡ. Әлбиттә, илектәрҙең һәр ҡайһыһының тәүге һикереш алған майҙансығы ҡарҙан әрселгән ҡаты ер булғанға күрә, улар был мөмкинлекте трамплин итеп файҙаланып, хәтһеҙ генә арауыҡҡа ырғый алды. Ҡасыуҙың уңышлы тамамланыуы ла тәүге һикерешкә бәйле. Әҙәмдәр был күренеште инерция тип атай. Ҡоралайҙар ниндәй генә арауыҡҡа һикермәһен, һәр ҡайһыһының да барып төшкән урыны тәрән көрт эсе ине. Көрт бауыр аҫтынан, тәрән булһа ла, ҡарҙың йомшаҡлығы уларҙың файҙаһына ғына. Икенсе һикерештәре тәүгеһенән ҡайтышыраҡ тойолһа ла, ыржайҙар әле генә ҡоралайҙар ҡатып ҡалған асыҡ урынға килеп сыҡҡанда, йәнлектәр был урындан утыҙ-ҡырҡ аҙымға алыҫлашып өлгөргәйне инде. Был арауыҡ ҡоралайҙар өсөн ике-өс һикерем араны ғына тәшкил итһә лә, ыржайҙарға был араны үтер өсөн йәнлектәргә ҡарағанда ике тапҡыр күберәк ваҡыт кәрәгәсәк. Күкрәктәре ҡеүәтле булһа ла, аяҡтары ҡыҫҡа шул бүреләрҙең. Шуға күрә улар ҡоралайҙар өйөрөнөң төп йүнәлешенең артынан китеүҙе мәғәнәһеҙлеккә һанап, сабып барған ыңғайҙарында бар диҡҡәтен иң артта ҡалыусы илеккә йә өйөрҙән бер яҡҡараҡ айырылып барғанына йүнәлтеп, төп көстәрен шуға тоҫмаллап өлгөрә. Өйөр артынан сабыусы ыржайҙарҙың төп өҫтөнлөгө лә шунда: уларҙы бынан һуң өйөр бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмай, улар бер йоҙроҡҡа тупланып, үҙ-ара аңлашып, тик бер ҡорбан артынан саба, бер илекте ҡыуалай. Бер нөктәне сүкей. Сабып барған килеш бер-береһен ял иттереп алырға ла өлгөрә ыржайҙар. Тәүҙә береһе алға ныҡ ынтылып, бар көсөн йүгереүгә сарыф итеп, ҡорбанын албырғата ла, ситкәрәк сығып, сабыуын яйлатып, арттан килеүсе ыржайға юл бирә, уныһы бер аҙҙан өсөнсөһөн алға үткәрә. Был арала тәүге бүре тынын рәткә һалып, тағы ла яҫҡынырға әҙерләнә.

Өс, дүрт, биш!

Икенсе һикереш яһағандан һуң Тертелдәк Һөтләкәй өләсәһенең өсөнсө һикереш яһап талпынғандан һуң буш ҡалған әҙер эҙенә барып төштө лә, шундуҡ үҙе лә өсөнсө һикереште яһаны. Әллә саманы онотто Тертелдәк, әллә өләсәһенең әҙер эҙенә баҫып һикереүе сәбәпсе булдымы быға, ул үҙен хәтһеҙ генә ваҡыт бейек һауала аҫылынып торғандай хис итте. Шул ваҡыт арауығында Тертелдәк хәтһеҙ ара алыҫлашып өлгөргән ҡартатаһы Таштояҡтың һыртын, уның артынан ынтылған Һөтләкәй өләсәһенең дүртенсегә һикергәнен, үҙҙәренең артынан яҫҡынған ыржайҙарҙы күреп өлгөрҙө. Секундтың ниндәйҙер өлөшөндә иң алдан сабып килгән һоро ҡарт ыржайҙың күҙ ҡарашы менән осрашты Тертелдәк. Ниндәйҙер кисерештәргә бирелеп торорлоҡмо инде был мөҙҙәттә? Тик уның өсөн генә ҡараштарының көтмәгәндә осрашыуы осраҡлы мәғәнәһеҙлек булып тойолғандыр.

Был көсөргәнешле мәл бик оҙаҡ тойолдо Тертелдәккә. Ул һауала аҫылынып торған ваҡыт эсендә өләсәһенең дүртенсе һикереш яһап, бушап ҡалған эҙҙәренә Тертелдәктән алда игеҙәге Тырт-Мырт килеп төштө. Хистәргә бирелһәң, артыҡ шашынып һикерәндәһәң, шул хәлгә ҡалаһың инде. Был турала күпме иҫкәртте уны йәйләүгә сыҡҡанда өләсәһе Һөтләкәй. Тырт-Мырттың һыртына килеп төшкән Тертелдәк игеҙәгенә мәшәҡәт яһамаҫ өсөн ситкә һикерҙе. Тырт-Мырт саманан тыш көсөргәнеш яһап, артабанғы һикереш яһап, өләсәләре Һөтләкәй артынан китте. Тертелдәк иһә, өйөрҙән ситкә күсеп тороп ҡалды. Һәр бер секунд ғүмерҙе хәл итер саҡта аңшайып тороу үлемгә тиң. Бер аҙ боролош яһап, Тырт-Мырт артынан сабырға ине ниәте, әммә ҡаршыһында үҫеп ултырған ҡайын ағасы уға бындай мөмкинлекте бирмәне. Ул ҡайынды уратып үтергә самаланы, әммә артабан да теҙелеп киткән ағастар уның ҡасыу йүнәлешен бер аҙ ситкә борҙо. Тертелдәк өйөрҙән айырылып, ҡайынлыҡтың икенсе яғынан сабып бара башланы. Өләсәһенең әҙер эҙенә баҫып ҡасыу түгел шул бында. Етмәһә, йәненең тертелдәүе, йөрәгенең өлпөлдәүе тынын ҡурып бара. Ыржайҙар унан иллеләп аҙым артта ҡалып саба. Әммә улар күмәк, ә Тертелдәк самаһыҙ һикерәндәүе арҡаһында яңғыҙы...

* * *

Берәүҙәр ҡаса. Икенселәр баҫтыра. Берәүҙәр ҡасыу юлы менән ғүмерен һаҡларға теләй. Икенселәр ҡасҡандарҙы баҫтырып тотоп, ғүмерен һуҙырға теләй. Йүгермәйһең икән, йәшәмәйһең...

Ыржайҙарға шул ғына кәрәк ине лә. Тәүҙә улар ырғандап ҡасып барыусы ҡыр кәзәләренең иң артынан эйәргән Тырт-Мыртты үҙҙәренең ҡорбаны итеп һайлағайны. Өйөр башы Тимертырнаҡ был хаҡта башҡаларға аңғартып та өлгөргәйне. Тәүҙә был мәғлүмәтте ул янында сабып барыусы инә бүрегә, көсөктәренең әсәһе Һортойға еткерҙе. Һортой, үҙ нәүбәтендә, сабып барышлай, тәүҙә бер яғына, аҙаҡ икенсе яғына боролоп, яндауынан сабып килеүсе ике йәшлек Йүгерек менән Һәүереккә бышырҙаны. Ыржайҙар лөғәтендә һүҙ атҡарҙы. Ырылдап. Фарман тиҙ арала бар өйөргә таралды. Һәүереккә иһә, өйөр башының махсус фарманын өҫтәлмә рәүештә айырып еткерҙе: ҡорбанды ҡыуып етеп барғанда, Һәүерек атаһы Тимертырнаҡҡа йә әсәһе Һортойға яҡыныраҡ булырға тейеш.

**(Дауамы. Башы 6-сы һанда).**

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# "ЧАПАЙ МЫЙЫҒЫ"НА ЫШАНЫРҒА...

## халыҡ ҡара һарыҡ түгел

**Көләү ғүмерҙе оҙайта, ти табиптар. Шулайҙыр, сөнки яҡшы кәйеф йәшәргә көс, дәрт бирә бит. Йылмайырға, көләп алырға теләһәң, мөмкинлектәр ҙә бихисап - телевизор төймәләренән баҫып әҙләүең генә бурыс. Мәҫәлән, Башҡортостан юлдаш, "Ҡурай" телеканалдары ла ҡалышмай был йәһәттән. "Кәмит", "Күңелле йәшәйбеҙ" кеүек тапшырыуҙарҙан ҡала башҡорт теленә тәржемә ителгән кинокомедиялар ҙа бихисап булып китте: "Кавказская пленница", "Джентльмены удачи", "Любовь и голуби", "Белое солнце пустыни" һ.б.**



Ошо комедияларҙың тәржемәһенә ҡарата бер-ике фекер әйтмәксе булдым әле. Беренсенән, тәржемәләүгә көс сарыф иткән ижади төркөмгә рәхмәт әйтке килә: оло эш башҡарғандар. Гайдай, Серыйҙың бөйөк комедиялары геройҙарының башҡортса һөйләшеүе бигерәк ирмәк. Һәр хәлдә, бала саҡтан ҡанға һеңгән был таҫмаларҙы әсәм ләғәтендә ҡарау ҡыҙыҡ тойола минә. Ләкин... Бөйөк урыҫ актерҙары Е. Леонов, Ю. Никулин, В.Этуш, Г.Вициндар ҡайһы саҡта ниндәйҙер шаҡылдап торған "ағас телдә" һөйләшә кеүек тойолоп китә лә, кәйеф боҙола. Ул актерҙарҙың ҡабатланмаҫ тауыштарын нисек кенә көсәнеп ҡабатлама, барыбер беҙҙең телдә килештереп булмаясаҡ. Сөнки был фильмдарҙағы һәр бер реплика ләғәттәребеҙгә үтеп инеп, "ҡанатлы һүҙҙәргә" әүерелеп, элекке СССР өҫтөндә шул төп нөсхәһендә, йәғни рус телендә осоп йөрөй. Шуға ла былдай "Алтын фонд"ҡа ингән фильмдарҙы, бигерәк тә комедияларҙы тәржемә итеүе ауыр, улар төп нөсхәлә, фәҡәт рус телендә яңғырарға тейеш, тип уйлайым. Һәр дубляждың уңышы, спектакль һәм фильмдарҙағы кеүек, әҫәрҙә уйнаясаҡ актерҙарҙың ролдәргә дөрөҫ тәғәйенләнеүендә ята. Әйтәйек, лирик тауышлы геройҙың рецидивисты, йәки кире образды уйнауы уны интегергә мәжбүр итә. Йәғни, актер тамашасыны ла алдай, үҙ тәрилкәһендә булмаған, үҙе лә ыҙалай. Бигерәк тә дубляждағы актерҙарҙың үҙ тауыштарын боҙоп, яһалма үҙгәртеп һөйләшеүҙәре теңкәгә тейә, ҡолаҡты "ҡырҡа". Уйын өҫтөнә уйын, сүмәлә өҫтөнә сүмәлә өҫтәлеп, ниндәйҙер боламыҡ килеп сыға. Ғөмүмән, былдай эштәрҙе беҙҙең халыҡта, ҡаш төҙәтәм тип күҙ сығарыу, тип атайҙар.

Ә бит тәржемә ителгән фильмдар араһында матур эштәр ҙә бар. Әйтәйек "Супер киленсәк" үзбәк фильмы, голливудтың "Форест Гамп"ы, "Эдера" фильмдары. Бигерәк тә төрки туғандарҙың сәғәт ярым буйына башҡортса һөйләшкәнен һоҡланып ҡарап ултырҙым. Әллә менталитет яҡын булғанға, күңелгә хуш килдеме: ғаиләм менән бер тынала ҡараныҡ. Бәлки, ошонан сығып, ижади төркөмгә икенсе жанрҙарҙағы фильмдарға күберәк дубляж эшләргәләр, тигәнерәк фекер әйтке килде.

"Киске Өфө"нөң бер һанында Айсыуаҡ Йомағолов менән Риза Исхаҡовтың халыҡ йырҙарына клиптар төшөрөүе тураһында мәҡәләне уҡып һөйөндөм. Оло эш эшләй егеттәр халҡыбыҙ алдында. Әмир Абдразаҡовтың юлын дауам итеүселәр булыуы ҡыуандыра. Ябай эш булмауын иҫәпкә алып, егеттәргә бер үтенесем бар ине: һеҙҙең тарихта ҡалырлыҡ алтындай мираҫығыҙ күҙ йыртырлыҡ "ваҡ-төйәктәр" менән боҙолмаһын ине, тим. Үкенескә ҡаршы, шундай "ваҡ-төйәк алдаҡтарға" күҙ йомоп ҡарау бар шул беҙҙә. Әйтәйек, шул уҡ "Алтын мираҫ" циклындағы Ҡаһым Мырҙашев шәхесенә арналған фильмда төп герой, нишләптер, йырҙарҙа йырланған һоро юрғаһынан төшөп, күк атҡа атланған. Бәлки, уның ниндәй атта булыуы мөһим дә түгелдер, әммә Ҡаһымыбыҙ һоро юрғаһында булһа, дөрөҫөрәк булыр ине, тим. Был - бер.

Икенсеһе, был күп тарихи клиптарҙың бәләһе - геройҙарҙың, унда ҡатнашҡан күмәк халыҡтың кейемдәре. Ҡуйыусы режиссер-рәссамдарҙың иғтибарһыҙлығынанмы, әллә тарихты белмәүҙәренәнме, бик матур алдаҡ - кейемдәр боламығы килеп сыға. Филармониянан, мәҙәниәт йорттарынан йыйылған кейемдәрҙә халыҡтың өҫтөнә килтереп ябалар ҙа - вәссәләм! Хәҙерге заман түбәтәйҙәре кейгән бабайҙар, джинсыларҙағы яугирҙар, әсе йәйге селләлә ҡамсат бүрек кейгән егеттәр (йәй көнө кәпәс кейеп йөрөп ҡара, йәнең сығыр. Халҡыбыҙҙы үҙебеҙ ахмаҡ хәлдә күрһәтәбеҙ ҙә баһа) һ.б. Шул уҡ фильмда Ҡаһым түрәне ағыулау сәхнәһе лә бәхәс тыуҙыра: мосолман динле башҡорттоң урыҫтар ҡулынан шарап эсеүе бик тә икеле (был афәт менән халҡыбыҙ 20-се быуаттың Бөйөк һуғышы мәлендә, унан һуң таныша башлай)! Йәнә, ағыулаусы урыҫ вельможаларының кейемдәре, өҫ-башы көлкө тыуҙыра: 1812 йылғы Ватан һуғышы мәлендә, нишләптер, 18-се быуат хәрбиҙәре кейгән мундирҙар, париктар хасил була. Ошо уҡ хәл "Йәйәүле Мәхмүт" йырына арналған клипта ла ҡабатлана. Был нилектән килеп сыға һуң? Халтура итеп ҡараҙанмы? Әллә аҡса (киношниктарҙың ярatҡан һылтаныуы) юҡлыҡҡа барып төртөләмә тағы ла?

Быларҙы яҙғанда бер мәҙәк хәл иҫкә төштө. Бер уҙаман Чебоксар ҡалаһында В.И .Чапаевтың музейына ингәс, уның... мыйыҡтарын күреп хайран ҡала. Яйыҡ йылғаһына батып үлгән ҡыҙыл командирҙың мыйыҡтары бында, музейҙа нисек хасил булған һуң? Аптыраған уҙаман музей хеҙмәткәре - йәш ҡыҙҙан һорарға булған. Хеҙмәткәр "Эйе, был нәҡ Чапаевтың мыйығы!" тип, үҙ һүҙендә тороп, тәкрарлаған. Аптыраузың сигенә еткән уҙаман музей етәкселегенә мөрәжәғәт иткәндән һуң ғына дөрөҫлөк асылған. Баҡтиһәң, был мыйыҡтар легендар командирҙы кинола кәүҙәләндергән актер Борис Бабочкиндың бутафор мыйыҡтары икән! Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та...

Йәмәғәт, быйың менән нимә әйтке килә: башҡортсаға ауҙарылған киноларҙы, тарихи клиптарҙы тамаша ҡылыусы халыҡ күҙһеҙ йәки һаңғырау түгел бит. Бешеп етмәгән, сифаты түбән булған эштәр менән халыҡты, был ысынлап та Чапайҙың мыйығы, тип ышандырырға маташмаһаҡ ине, тим. Халыҡ бит күптән ҡара һарыҡ түгел... Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ был турала?

**Абдрафиҡ СӘФӘРҒӘЛИН.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ХАЛЫҠТЫҢ МАТЕМАТИК ҺАНЫ...

## сифат һанына күсергә тейеш

**Әмир ӘМИНЕВ, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире:** Ҙурҙан ҡупҡанда, ил, дәүләт, милләт-ара, хатта кешеләрҙең бер-береһе менән мөнәсәбәттәре лә йылдар, йылдар һәм быйыл тиһең, тиҫтәләгән йылдар буйы формалаша. Әйтәйек, бөгөн берәү дошман икән, иртәгә уның дуҫ булып йәшәүе икеле - яҡынайыр өсөн ваҡыт, ваҡыттан тыш түҙемлек, аҡыл, теләк, башҡа сифаттар кәрәк. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, һәр заманда ла башҡорттоң үҙ зыялылары булған һәм үҙҙәре йәшәгән дәүерҙә үҙ һүҙен, кәңәш-төңәшен әйтә килгән, йәғни башҡорт йәмғиәте улар күрһәткән юлдан барған, камиллашҡан, ижтимағи, сәйәси үҫешкән. Улар, бөгөнгө тел менән әйткәндә, милләттең аңы, интеллекты, юлбашсыһы булған. Беҙ бөгөн Башҡортостан тип аталған дәүләттә йәшәйбеҙ икән, тимәк, быға зыялыларыбыҙҙың нисәмә быуын кәрәше, аҡылы ярҙамында ғына өлгәшкәнбеҙ. Шуның өсөн бөгөн уларға, йәшәгән һәм көрәшкән быуынға, рәхмәт әйтергә тейешбеҙ.

Ҙур еңеүҙәр бәләкәй еңеүҙәр аша яулана. Ул эстафета рәүешендә һәр быуынға мотлаҡ тапшырылып барырға тейеш, шулай булмаһа, маңҡортҡа әйләнәсәкбеҙ. Һәр быуын, һәр дәүер нимәлер эшләргә бурыслы. Күп нәмә үҙебеҙҙән тора. Әлбиттә, ҙур дәүләт эсендә йәшәгәс, үҙебеҙҙән генә тормаған нәмәләр ҙә бар, ләкин ниндәйҙер кимәлдә уларҙың законҡағиҙәләренә буйһонһаҡ та, үҙебеҙҙеке дә башҡара барырға тейешбеҙ. Шулар иҫәбенә мин телде һаҡлауҙы, балаларыбыҙҙы мәктәптәрҙә үҙ телебеҙҙә уҡытыуҙы, әйҙә милләт традицияларында тәрбиәләүҙе, башҡортса һөйләшеүҙе, халыҡтың төрлө юҫыҡтағы ижадын, фольклорҙы, эпос-легендаларҙы, көнкүреш йолаларын һаҡлауҙы һәм уларҙы пропагандалауҙы индерәм. Бынан тыш, тарихыбыҙҙың аҡ таптарын табыуҙы, ил азаматтарын, шәхестәребеҙҙе күрһәтеүҙе, тарихи китаптарҙы, документтарҙы нәшер итеүҙе, художестволы әҙәбиәтте, матбуғат сараларын таратыуҙы ла мөһим эштәр иҫәбендә тип хисаплайым.

Батыр берҙе йығыр, белемле меңде йығыр, тигән иҫкермәҫ һынамыш бар. Ҡылыс һелтәп, һөңгө сойорғотоу замандары үтте, ныҡлап, заманса белем алыу мәле етте. Заман башҡа - заң башҡа. Беҙ бер нисә тел белгән, үҙендә милләттең меңәр йыллыҡ тәжрибәһен, педагогикаһын, фәлсәфәһен туплаған, аҡыллы ҡарашлы интеллектуалдар арҡаһында ғына алға китә, башҡалар араһында юғалмай, йотолмай йәшәй алаҫаҡбыҙ, милләтебеҙҙе яҡлай, дәүләтебеҙҙе һаҡлай алаҫаҡбыҙ. Халыҡтың математик һаны бөгөн сифат һанына күсергә тейеш.

ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘНГЕ АШ...
## файҙалы

■ Швецияның Умео университеты ғалимдары үткән быуаттың 80-се йылдары аҙағында башлаған тәжрибәгә йомғаҡ яһаған. Сирек быуатҡа һуҙылған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, иртәнге ашты ашамау сәләмәтлеккә ҙур зыян килтерә. Өлкән класс уҡыусылары араһында үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙең тәүге өлөшөндә уларҙың иртәнге ашҡа мөнәсәбәте асыҡлана. 27 йылдан һуң улар тулы медицина тикшеренеүе үтә. Үҫмер осоронда иртән ашамауса төркөм араһында юғары ҡан баҫымы, метаболизм тайпылыштары менән яфаланыусылар 68 процентҡа күберәк осрай. Тәм-том ҡушып сәй эсеүселәр араһында ла бындайҙар һаны юғары. Метаболизм синдромында организм физиологияһының бер юлы бер нисә күрһәткесе норманан ситләшкән була: майҙарҙың кимәле юғары, ә организмды холестериндан һаҡлаусы "файҙалы" майҙар юҡ тиерлек, артериаль ҡан баҫымы юғары, ҡанда глюкоза кимәле лә норманан күберәк. Бындай кешеләр "алма" тибында һимерә. Һөҙөмтәлә, был симптомдар барыһы ла диабет, хатта инсультҡа алып килеүе билдәле.

■ Британия ғалимдары баш мейеһенең дөрөҫ ҡарар ҡабул итергә ярҙам иткән һәм намыҫ сифатында сығыш яһаусы өлөшөн асыҡлаған. Кешеләрҙең һәм маймылдарҙың баш мейеһен тикшереп, ғалимдар үҙенсәлекле секреция барлығын асыҡлаған. Был секреция башҡаларынан айырылып тора һәм нервылар тукымаһынан торған шарҙы хәтерләтә һәм ул кешенең баш мейеһендә генә бар. Ғалимдар раҫлауынса, баш мейеһенең был өлөшө сит кешеләрҙең хаталарын күҙәтеү, үҙләштерелгән бар һәләттәрҙе ҡулланыу мөмкинлеге бирә. Бынан тыш, ул яҡшыны яманан айырырға, төрлө ҡылыҡтарҙы баһаларға ярҙам итә.

■ Эш көнөнөң оҙайлы булыуы нервылар көсөргәнешенә һәм аҡыл зәғифлегенә килтерә - 2 мең дәүләт хеҙмәткәрен тикшереп, Бөйөк Британия ғалимдары ошондай фекергә килгән. Ғалимдар раҫлауынса, аҙнаһына 55 сәғәт эшләүсе кешеләрҙең аҡыл ҡеүәһе эш урынында "янмаған" коллегаларына ҡарағанда күпкә түбәнерәк. Бынан тыш, хеҙмәт һөйөүселәр хәтер насарайыуына ла зарланған. Оҙайлы эштең кире яғы йоҡлай алмау, депрессия, сәләмәт булмаған йәшәү рәүеше, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре хәүефенең юғары булыуы менән билдәләнә. Ланкастер университеты ғалимы, профессор Кери Купер әйтеүенсә, сәләмәтлек өсөн артыҡ эшләүҙең зыянлы булыуы билдәле булһа ла, быны аҡыл эшмәкәрлегенә йоғонто яһауы тураһында асыштар булғаны юҡ. "Был тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, хеҙмәткәрҙәрҙе оҙаҡ итеп эшләтеү ыңғай түгел, кире һөҙөмтәгә алып килә. Кеше ял да итә белергә тейеш", - тип иҫәпләй профессор.

■ Генетика ғалимдары билдәләүенсә, насар йоҡлау һәм яман шеш күҙәнәктәре үҫеше араһында бәйләнеш бар. Ғалимдар яман шеш күҙәнәктәре булған ҡомаҡтарҙа бер нисә клиник тәжрибәләр үткәрә. Чикаго университеты белгестәре ҡомаҡтарҙы ике төркөмгә бүлә. Беренсе төркөмдәге йәнлектәрҙе йоҡлатмайҙар тиерлек, ике минут һайын уятып торалар. Икенсе төркөм иһә был ваҡыт эсендә йоҡлай. Тикшеренеүҙәр тамамланғас, тәүге төркөмдәге ҡомаҡтарҙың хәле насарайғаны асыҡлана, уларҙың яман шеше икенсе төркөмдәгенә ҡарағанда ике тапҡырға үҫә. "Туйғансы йоҡламау кешенең иммун системаһына тәьҫир итеп, уны насарайта. Һөҙөмтәлә, иммун системаһы түбәнәйеү арҡаһында организм яман шеш менән көрәшә алмай", - ти проект авторы Дэвид Гозал.

ШАҢДАУ

# "МОНАРМЫ? ПАРАЛЛЕЛЬ ДОНЪЯМЫ?"



**"Киске Өфө"лә былтыр йыл аҙағында баҫылған "Монармы? Параллель донъямы?" тигән мәҡәләләгә хәбәр йәмғиәттә киң генә резонанс тыуҙырҙы. Хатта "был ахырызаман етеүен аңлата" тиеүселәр ҙә бар. Ә бит физика фәне законын ҡулланып, был тәбиғәт күренешен аңлатып була.**

Физикалағы "Оптика" бүлегененң төп ҡанундарының береһе булып "Яҡтылыҡтың бер төрлө мөхиттә тура һыҙыҡ буйынса таралыуы" тора. Ә инде бер төрлө булмаған мөхиттә уның таралыу законлары үҙгәрә.

Һауа торошо архивына күҙ һалғанда, 2013 йылдың 24 ноябрендә Асҡын, Баймаҡ, Мәләүез тирәләрендә һауа температураһы бер кимәлдәрәк: -1, - 2 градус булған. Иртәнге температура көндөҙгөһөнән ныҡ айырылмай һәм елдең дә тиҙлеге 1-2 м/с ғына. Был урындарҙа һауаны бер төрлө мөхит тип атарға була. Ә бына Иҫке Собханғолда көндөҙ +6 градус булһа, кискә -3-кә тиклем төшкән, тимәк, иртәнге температура ла түбән генә булғандыр (тулы мәғлүмәт юҡ). Магнитогорск ҡалаһында иртән -10 градус булһа, көндөҙ +3 градусҡа тиклем йылынған. Аҙ ваҡыт арауығы өсөн был бик ҙур айырма. Тап ошондай ваҡытта һауаның йылыныуы тиҙ бармай. Аҫҡы ҡатламдар ерҙең төнгө һыуығынан һуң тиҙ генә йылынып китә алмай, ә өҫкө ҡатламдар ҡояш йылыһынан нығыраҡ ҡыҙа. Был көн Магнитогорск ҡалаһында болотһоҙ, ҡояшлы, елһеҙ була һәм һауаның дымлылығы иртән 89 проценттан көндөҙ 43 процентҡа тиклем кәмей (әйтергә кәрәк, тирә-яҡ районларҙа һауа дымлылығы улай ҙур тиҙлек менән үҙгәрмәгән).

Ошо сәбәптәр бөтәһе бергә һауа ҡатламдарында ҙур айырмалыҡ барлыҡҡа килтерә. Аҫҡы ҡатламдарҙа һауа тығыҙлығы ҙурыраҡ булһа, өҫкә ҡарай тығыҙлыҡ кәмей. Ошондай мөхиттә объекттан сыҡҡан нур бер ҡатламдан икенсеһенә күскәндә һынып сағыла һәм тура түгел, ә дуға һымаҡ кәкере һыҙыҡтан барып, бер нисә тиҫтә йәки йөҙләгән саҡрымдарға таралып, килеп төшә. Тығыҙлығы ныҡ айырмалы булған һауа ҡатламдарында һынған нурҙар атмосферала монар йәки сағым күренешен хасил итә.

Монар-сағым тураһында донъяла күп кенә мәғлүмәт бар. Уны өс төргә бүлеп йөрөтәләр: аҫҡы монар - юлдарҙа "һыу" һәм башҡа һүрәттәр барлыҡҡа килеү, өҫкө монар - алғы яҡтағы һауа ҡатламында һүрәттәр барлыҡҡа килеү, ситке монар - төрлө объекттарҙың ҡырында һүрәттәр килеп сығыу. Беҙ һүҙ алып барған монар икенсе төргә инә һәм уны тағы ла "алыҫтағы монар" тип тә йөрөтәләр. Өҫтә килтергәндәрҙе туплап, Бөрйән районында күренгән ҡала - монар йәки сағым, һәм ул Магнитогорск ҡалаһы булырға тейеш, тип әйтмәксемен. Сөнки монар алдағы горизонт артындағы объекттарҙы күрһәтә, ҡайһы саҡта бик алыҫта булған әйберҙәр ҙә күренеүе мөмкин. Ырымбур ҡалаһы монарҙы күҙәтеүсе кешеләргә көньяҡ-көнбайыш яғынан артта тороп ҡала һәм ул ошо ерҙә монар һүрәте бирә алмаҫ ине. Ә Белорет ҡалаһында хәҙерге көндә аэропорт юҡ, ҙур самолет күренеше бер нисек тә тап килмәй.

Тарихты байҡап ҡараһаң, сүллектәрҙә күренгән монар-сағымдар күпме каруандарҙы һәләк иткән: бына ғына йәйелеп ятҡан һыулыҡтар, барып еттем генә тигәндә, ҡапыл юҡҡа сыға. Диңгеҙ буйҙарында ла йыш осрай монар. Инде нисә быуат "Осоусы голландец" булып диңгеҙ буйлап йөрөгән карaптар осрай. Ҡапыл ғына пәйҙә булған корабль бер ниндәй ҙә сигналға яуап бирмәй генә бара ла, үҙенән-үҙе юҡ була. Тимәк, бынан бик күп саҡрымдар аша горизонт артында китеп барған корабль һауалағы рефракция арҡаһында яҡын булып күренә.

Ҡайһы бер объекттар хатта һауала ла хасил була. Шулай, 1815 йылда Бельгияның Веръе тигән ҡалаһында бер иртәлә халыҡ ҡот осҡос күренештең шаһиты була: һауала һуғыш осоро ҡуҙаллана. Һүрәт шул тиклем асыҡ күренә, хатта һалдаттарҙың костюмдарын, ҡоралдарын айырым ҡарап була. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, был Ватерлоо эргәһендәге һуғыштың башланған иртәһе булып сыға. Өҫкө монарҙар шулай уҡ баштүбән дә була. Былар бөтәһе лә атмосфераның торошона бәйле. Һүрәттәрҙең үҙгәреп тороуы төрлө тығыҙлыҡтағы һауа ҡатламдарының бер-береһенең өҫтөнән айырым хәлдә хәрәкәт итеүенә бәйле.

Санкт-Петербургтан 40 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан Ломоносов тигән ҡала йыш ҡына Санкт-Петербург урамдары, йорттары, Нева аша һалынған күперҙәр бик асыҡ булып, ус төбөндәге һымаҡ ҡына булып күренә икән. Бәлки, Аҡбейек тауында ла Магнитогорскиҙың миражы ҡабатланып торалыр?..

**Зилидә ШӘРИПОВА,**
**БДУ ның Сибай институты өлкән уҡытыусыһы.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# АҠ БАЛСЫҠ...
## зыянмы, файҙамы?

**Ҡайһы берәүҙәрҙең аҡ балсыҡ ашағанын ишеткәнегеҙ барҙыр. Мин уны икмәк урынына ашайым, тиһәм дә була, ҡаҙып алынған бер тоҡ аҡ балсыҡ ни бары өс-дүрт айға ғына етә... Әлбиттә, уның таш булып бөйөргә ултырыуы тураһында ла ишеткәнем бар, тик ҡайһы берәүҙәр уның организмға бөтөнләй зыянһыҙ булыуы тураһында яҙа. Аҡ балсыҡты кальций глюконаты менән дә алыштырып ҡараным, тик файҙаһыҙ, "Кальций-Д3 Никомед" та эсеп ҡараным, барыбер аҡ балсыҡһыҙ булмай. Тимәк, кальцийҙан башҡа витаминдар кәрәк? Ошо һорауҙарыма яуап бирһәгеҙ ине.**

**Ләйсән.**

Медицина фәндәре докторы, БДМУ профессоры **Тәлғәт Рәхимйән улы Зөлкәрнәев** әйтеүенсә, гел аҡ балсыҡ ашағы килеүҙең сәбәптәре төрлөсә булыуы ихтимал. Беренсеһән, организмға һеҙ уйлағанса кальций түгел, ә тимер етешмәй. Ниндәйҙер сәбәптәр менән гемоглобин кимәле түбәнәйгәндә тәм һәм еҫ һиҙеү рецепторҙары боҙолғанда кешегә аҡ балсыҡ, аҡбур, күмер тәме, шулай уҡ бензин, янған газ төтөнө йәки кәрәсин еҫе оҡшай башлай. Тышҡы билдәләрҙән тағы ла тырнаҡтарҙың үҙгәреүен күҙәтергә була, улар буйға йәки арҡырыға һыҙыҡтар менән ҡаплана, йәиһә еҫкә батҡан кеүек тойола. Кеше тиҙ арый, даими көсһөҙлөк тоя. Гемоглобин ҡандың ҡыҙыл тәнсәләренә төҫ биреүҙән тыш, кислород менән ҡушылыуға һәләтле матдә, шуға ла гемоглобин түбән булһа хәрәкәтләнгәндә тын ҡыҫыла, сөнки эске ағзалар кислородҡа туймай, тиреағара, йөҙ шешенгән һымаҡ була. Гемоглобин күләме 80-70 г/л тиклем түбәнәйһә, кеше йыш иҫен юғалта, баш әйләнә, ҡолаҡтар шаулай, аңлы йүнләп юғала. Гел кислород етешмәү һөҙөмтәһендә бауыр, бөйөр, йөрәк мускулдары эшмәкәрлеге боҙола, ҡыҙыл үңәстең һәм йотҡолоктоң лайлалы шекәрәһе кибә. Әгәр ҙә ошо билдәләрҙән һуң да кеше табипҡа мөрәжәғәт итмәй икән, ауырыуҙың һуңғы стадияһында ҡанда эритроциттар күләме аҙая, был иһә тағы ла күңелһеҙерәк эҙемтәләргә алып килә.

Икенсенән, гел аҡ балсыҡ ашағы килеүҙең сәбәбе - организмға цинк етешмәй. Беҙ организмға витаминдар һәм кальций етешмәй тип уйларға күнеккәнбеҙ, ә бына

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘҺЕ



**Былтыр гәзиттең 49-сы һанында Әғләм Шәриповтың "Ҡырмыҫҡаларға ҡарап, кешенең ялҡаулығына йәнем әсене" мәҡәләһен уҡып сыҡҡас, ошо бөжәктәр менән булған бер хәлде яҙырға булдым.**

# ҺӘР ЙӘН ЭЙӘҺЕ...

## тоҡом ҡалдырыуға хоҡуҡлы

Тыуған ауылымды ҡалдырып, ғаиләм менән ҡалаға күсеп киткәнгә ун йыл ваҡыт үтте. Ә ҡасандыр ауылда булған ошо хәл бер ҙә генә лә иҫтән сыҡмай. 90-сы йылдарҙың бер йәйендә ҡайындарға ҡорт төштө. Төнөн сығып тыңлаһаң, шул бөжәктәрҙең ҡыштыр-ҡыштыр япраҡ ашап, зифа ҡайындарҙы һәләк иткәне ишетелеп тора торғайны. Ағастарға ҡырғын булып төшкән ҡороҡтостар арҡаһында Әбйәлил районының Өскүл ауылындағы Ямангир тауы яп-яланғас булып ҡалды.

Беҙҙең ҡапҡа эсендә лә матур булып ҡайын ағасы үҫә ине. Шул ағасты ҡорттарҙан һаҡлайым тигән уй менән, урманға барып, иләүҙәренән бер биҙрә ҡырмыҫҡа тултырып, шуны ҡайын төбөнә килтереп ауҙарҙым. Улар ағасҡа үрмәләп менә лә ҡороҡос бөжәктәрҙе ашап бөтөрә, йәнәһе. Ике-өс көндән ҡайын төбөнә килеп ҡараһам, үҙ күҙҙәремә үҙем ышанмаһым.

**Ағас төбөндә иләүҙән килгән бер генә сыбыҡ та, бер генә ҡырмыҫҡа ла тороп ҡалмаған. Бәхтиһәң, минең ҡайынымды дауаларға тейеш булған ҡырмыҫҡалар кире урманға, үҙ тыуған ерена күсенеп киткән икән. Иләү менән өй араһы яҡынса 150 метр самаһы ине. Шул саҡта егәрле бөжәктәргә әллә күпме мәшәҡәт өҫтәүемә күңелдә үкенеү ҙә, уңайһыҙланыу ҙа тыуғайны. Кешегә генә түгел, беҙ күҙгә лә элмәгән бөжәктәргә тиклем үҙ тыуған ереңең ни тиклем ғәзиз булыуына ишара ла булғайны был.**

Бөгөн тәбиғәттең яҡын дуҫтары булған урмансылар, мәктәп уҡыусылары егәрле бөжәктәрҙе төрлөсә ҡурсаларға, һаҡларға тырыша. Төрлө ҡыр хайуандарынан, малдан аралау өсөн иләүҙәрҙе кәртәләп ҡуя, сүпсарҙан таҙарта. Үкенескә күрә, аҡтың ҡараһы булған кеүек, яман уйлы әҙәмдәр ҙә күп шул эргәбеҙҙә. Нәҡ шундайҙар бер зыянһыҙ, үҙ көндәрен үҙе күреп йәшәгән ҡырмыҫҡаларҙы ла рәнйетеү юлдарын таба. Төрлө ҡаларҙан килгән туристарҙан тыш, ергә, тәбиғәткә ныҒыраҡ берегергә тейеш булған ауыл кешеләренең иләүҙәрҙе туҙҙырып, улар өҫтөнә төрлө сүп-сар өйөмө ырғытып китеүе бигерәк тә ҡыҙғаныс күренеш. Ә бит Ҡөрьәндең Ән-нәмл сүрәһендә ҡырмыҫҡалар тураһында ла телгә алына. Унда Сөләймән бәйғәмбәргә ҡырмыҫҡаларҙың һәм ҡоштарҙың телдәрен аңлау ғилеме бирелеүе тураһында бәйән ителгән.

➔ **Ә хәҙер тәбиғәттәге башҡа йән эйәләре тураһында бер нисә һүҙ.** Ер өҫтөндә генә түгел, һыу аҫтында ла йәшәү өсөн көрәш бара. Мәҫәлән, **аҡ балыҡты** ғына (пелядь) алып ҡарайыҡ. Был балыҡ ни бары 4 йыл ғына йәшәй. Дүртенсе йылында уылдырыҡ һала ла үлә. Уларҙы йыртҡыс балыҡтар, мәҫәлән, алабуға ашап бөтөрә. Шуға күрә лә хәҙер аҡ балыҡтарҙы махсус заводтарҙа ғына үрсетеп, һыуға ебәрәләр. Карптарҙың йылға ситенә килеп һалған уылдырыҡтары 3 көндән һуң үләндән ысҡынып, ҡуҙғалып китһә, аҡ балыҡтың уылдырығы иһә 6 ай буйы бер урында ята.

➔ Ҙур **суртан** электереүенә кем генә ҡыуанмай икән. Ә бына ошо балыҡтарҙың бер килоға артыр өсөн 8 килограмм балыҡ ашарға тейеш булыуын барыһы ла белеп бөтмәйҙер. Суртандар 1 млн- ға тиклем уылдырыҡ сәсә ала. Уылдырыҡтар 3 мм диаметрҙағы ҙурлыҡта, бер аҙ йәбешкәк була. 2-3 көндән йәбешкәклек бөтә. Суртан балығы һурпаһы хәлһеҙ кешеләр өсөн бик файҙалы һанала. Күп кенә балыҡтар таҙа һыу сығанағын ярата. Улар ҙа башҡа йән эйәләренә оҡшап, йылыға тартыла. Шуға күрә яҙ етеп, көндәр йылына башлағас та, балыҡтар яр ситенә яҡынайыусан була.

➔ **Ҡайһы тирәлә балыҡ күп булыуын яр ситенән ҡарап тороп та белеп була.** Мәҫәлән, ғәҙәти ҡыр өйрәктәренең бер төрө йылға буйлап, балыҡтарҙы баҫтырып алып йөрөй. Өйрәктәрҙең баҫтырышып йөрөүенә ҡарап, балыҡлы урынды ла самаларға була. Талдарға ҡунып, балыҡ аңдыған ала ҡарғаларға ҡарап, күпләп сабаҡ торға мөмкин. Сабаҡтар уылдырыҡтарын күберәк осраҡта яр ситенә, үләнгә сығып һала. Ә ала ҡарғаларға шул ғына кәрәк тә, һыу өҫтөнән генә арҡаны күренеп йөрөгән балыҡтарҙы тотоп алыу уға бер ни тормай. Уылдырыҡ сәскән осорҙа өйөрө менән йөрөгән суртандарҙы күпләп тотоу өсөн браконьерҙар төрлө тыйылған ысулдар ҡуллана.

Шулай итеп, уйлай китһәң, һәр тере йән эйәһе йәшәү өсөн көрәшә, уларҙың һәр береһе йәшәүгә, үрсеүгә, үҙ тоҡомон ҡалдырыуға хоҡуҡлы. Ә инде тәбиғәтте, ундағы тере йән эйәләрен һаҡлау һәм ҡурсалау мотлаҡ беҙҙең бурысыбыҙ. Шуға күрә, үҙебеҙ йәшәгән мөхиткә саҡ ҡына булһа ла һаҡсылыраҡ булһаҡ ине.

**Сәйфулла ҒАЙСИН.**
**Белорет ҡалаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Характер: ҡая кеүек ныҡ булығыҙ

Лидерҙың ҡатмарлы хәл-торошта үҙен нисек тотоуы уның характеры тураһында һөйләй. Күрсәк уның характерын формалаштырмай, әммә һәр хәлдә уны таба һәм аса. Иң ҙур бөлә шунда - ул үҙенә күрә һынылыш ваҡыты һәм кешене һайлау алдына ҡуя: характер күрһәтергәме, әллә килешергәме? Характерҙы һайлаған һәр осраҡта, хатта был кире һөҙөмтәләргә килтерһә лә, уға көслөрәк булыу мөмкинлеге асыла. Александр Солженицын билдәләүенсә, "ерҙә йәшәүҙең асылы - беҙ уйлағанса именлеккә өлгәшеүҙә түгел, ә күңелде ныҒытыуҙа". Характерҙы ныҒытыу һәм уны һәр яҡлап үҫтереү - лидер булараҡ уның түгел, шәхес булараҡ үҫешебеҙҙең төп шарты ул. Һәр кем характер тураһында бына нимәләр белергә тейеш:

Характер - ул буш һүҙ генә түгел. Һәр кем үҙе тураһында камил характерға һәм тәртипкә эйәмен, тип әйтә ала, әммә ысынбарлыҡты уның ғәмәлдәре нисек икәнен үҙе күрһәтә. Характерығыҙ асылығыҙҙы, был, үҙ сиратында, тирә-яҡ мөхите нисек ҡабул итеүегеҙҙе билдәләй. Ә донъяны ҡабул итеү ысулығыҙҙы ғәмәлдәрегеҙ билдәләй. Тап шуға күрә лидерҙың характерын уның ғәмәлдәренән айырып ҡарарға ярамай. Әгәр лидерҙың ниәттәре һәм ғәмәлдәре бер өҙлөкһөҙ бер-береһенә ҡаршы килә икән, уның характерына иғтибар итеп, ни өсөн шулай булыуын асыҡларға кәрәк.

Һәләт - ул бүләк, уның ҡарауы, характер - һеҙҙең шәхси һайлауығыҙ. Тормошта беҙҙең ихтыярға буйһонмаған күп нәмә бар. Ата-әсәләрҙе һайлап ала алмайбыҙ. Беҙгә тыуыу йәки беҙҙе тәрбиәләү урынына, уның шарттарына йоғонто яһау мөмкинлеге бирелмәгән. Һәләттәребеҙ исемлеген тулыландыра йәки интеллект коэффициентын арттыра алмайбыҙ. Ә бына характерҙы үҙебеҙ һайлайбыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, һәр саҡ һайлау алдында ҡалғанда - ауыр хәл-торош менән көрәшкәндә йәки унан ҡасҡанда, хәҡиҡәт алдында бөгөлөп төшөргә йәки уның ауырлығы аҫтында ла аяҡ өҫтө ҡалырға, енел аҡса алып ҡалырғамы йәки тулы хаҡ түләргәме - һәр саҡ характер күрһәтәбеҙ. Үҙебеҙсә һайлау яһап, беҙ характерыбыҙҙы барлыҡҡа килтерәбеҙ.

Характер кешеләр менән мөнәсәбәттә уңыш килтерә. Ысын лидерлыҡ башҡа кешеләрҙе ылыҡтырыуҙы аңлата (әйтемдәгесә: "Әгәр һеҙ артығыҙҙан башҡаларҙы эйәртәм тип уйлайһығыҙ, ә артығыҙҙа бер кем дә юҡ икән, һеҙ бары тик ял итеп кенә йөрөйһөгөҙ"). Арттан эйәреүселәр, әгәр лидерҙың характеры тотороҡло булмауын белһә, уға ышаныуҙан туҡтай һәм башҡаса бер ваҡытта ла уның артынан бармай.

Лидерҙар бер ваҡытта ла характерҙары һалған сикләүҙәрҙән юғары күтәрелә алмай. Ҡасан да булһа ниндәйҙер уңышҡа өлгәшеп, баштарын юғалтҡан һәләтле кешеләрҙе күргәнегеҙ булдымы? Был күренешкә аҫҡыс тағы ла характерҙа ята. Гарвард медицина мәктәбе психологы Стивен Берглас, юғары уңышҡа өлгәшкән, әммә ҡалай ныҡлы характерға эйә булмаған кешеләр түбәнгә, һәләкәткә тәгәрәй, тигән. Улар яҙмышына түбәндәге дүрт варианттың береһе йәки бер-нисәһе яҙылған, тип тә раҫлаған Берглас: мин-минлек, яңғыҙлыҡ тойғоһо, даими мажара эҙләү, даими рәүештә иренә йәки ҡатынына хыянат итеү. Атап үтелгән варианттар - көсһөҙ характер хаҡы.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**

цинк кеүек мөһим элементты иҫкә лә төшөрмәйбеҙ. Медицинала уны кҿҙәнәк эсендәге элемент тип йөрөтәләр, сөнки организмда цинктың 99 проценты кҿҙәнәктәр эсендә тупланған. Бауыр, мускул, һөйәк тукымаһы һәм тире өсөн цинк айырыуса кәрәк. Цинк етешмәгәндә кеше тиҙ арый, эшләү һәләте һәм дөйөм иммунитет түбәнәйә, ҡырҡылған, һыҙырылған урындар оҙаҡ бөтәшә, тәм һәм еҫ һиҙеү тойғолары боҙола, шулай уҡ тырнаҡтарҙың пластинаһы дистрофик үҙгәрештәр кисерә, биткә һыткылар сыға, сәс ҡойола һ.б. Ғәҙәттә, таулы илдәрҙә, шул иҫәптән беҙҙең республикала йәшәүселәрҙең барыһының да организмына был элемент етешмәй. Шуға ла аҡ балсыҡ ашауҙың төп сәбәбе - организмға кальций түгел, ә иң тәүҙә тимер һәм цинк етешмәүҙән булыуы ихтимал.

**Цинкка** бай ризыҡтарға диңгеҙ моллюскыһы, ҡуҙаҡлылар, фисташка сәтләүеге, ҡабаҡ һәм көнбағыш орлоҡтары, бөшмәк, ҡурай еләге, көртмәле, какао, диңгеҙ ризыҡтары инә. Цинк яҡшы үҙләштерелһен өсөн шулай уҡ ҡайһы бер ҡағиҙәләрҙе кҿҙәтергә кәрәк.

- Кальций өҫтәмәләре, шулай уҡ һөт ризыҡтары цинк үҙләштерелеүҙе 50 процентҡа түбәнәйтә. Карбонатлы минераль һыуҙар ошондай уҡ тәьҫиргә эйә.
- Вегетариандар диетаһы цинк ҡытлығына килтерә, сөнки үҫемлек клетчаткаһы һәм улар бай булған фитин һәм фолий кислотаһы цинк элементына үҙләштерелергә бирмәй.
- Кофеин һәм алкоголь цинкты йыуып сығара.
- Оҙайлы стресс, шәкәр диабеты, ашҡаҙан-эсәк трактының ҡайһы бер ауырыуҙары, бауыр циррозы, оло йәштә булыу - ошоларҙың береһе булһа ла һеҙгә ҡағыла икән, цинк тураһында уйланырға урын бар.

**Аҡ балсыҡ** (каолин) составында кремний, цинк һәм магний күп. Йәшел балсыҡ - баҡыр, тимер һәм тағы ҡайһы бер микроэлементтарға, һары һәм ҡыҙыл балсыҡ тимергә бай. Халыҡ медицинаһы һәм башҡа традицион булмаған ысулдар менән дауалаусы белгестәре, дөрөҫ ҡулланһаң, балсыҡтың организм өсөн зыяны юҡ, тип билдәләй. Иң тәүҙә, балсыҡ яҡшы абсорбент, ул организмды токсин, шлак һәм ауыр металдарҙан таҙарта, бактерияларҙы юҡҡа сығара, еҫ һәм газдарҙы "йота". Балсыҡтың дауалау һәләте уның составындағы радиоактив элемент - радий менән бәйле. Әгәр ҙә вакланған балсыкты оҙайлы ваҡыт ҡояш нурҙары аҫтында тотһаң, радийҙың күләме тағы ла арта.

Балсыҡты һыуға болғап эсергә кәрәк. 1 стакан һыуға 1 ҡалаҡ балсыҡ һалаһың һәм ағас ҡалаҡ менән болғатып эсәһең. Тимер ҡалаҡ балсыҡтың файҙалы үҙенсәлектәрен юҡҡа сығара. Стакандың төбөнә ултырған балсыҡты түгәһең. Өлкән кеше өсөн иң оптималь күләм булып - көнөнә 2 балғалаҡ балсыҡ иҫәпләнә.



## 17 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Олимпийское утро на "Первом".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
10.00 "Жить здорово!" (12+).
11.05 "Модный приговор".
12.00, 14.00, 15.00, 17.00 Новости.
12.15 "Время обедать!"
12.55, 14.15 XXII зимние Олимпийские игры в Сочи. Сноуборд-кросс. Мужчины. Квалификация.
14.30 "Энциклопедия зимней Олимпиады".
15.10 "Сочи-2014".
15.30 XXII зимние Олимпийские игры. Сноуборд-кросс. Мужчины. Финал. Керлинг. Мужчины. Россия - Германия.
17.15 XXII зимние Олимпийские игры в Сочи. Керлинг. Мужчины. Россия - Германия. Продолжение.
19.00 "Владислав Третьяк. Вратарь без маски".
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
20.25 XXII зимние Олимпийские игры в Сочи. Соревнования двоек в бобслее среди мужчин. Выступления фигуристов. "Танцы. Произвольная программа".
22.30 "Время".
22.50 XXII зимние Олимпийские игры. Фигурное катание. Танцы. Произвольная программа. Продолжение. Бобслей. Мужчины. Двойки. Продолжение.
01.10 "Вечерний Ургант" (16+).
02.00 "Сочи-2014. Итоги дня".
02.30 XXII зимние Олимпийские игры.
04.00 "Татьяна Навка. Лед и пламя".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Найти и обезвредить. Кроты" (12+).
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
10.30, 22.40 "Дневник Олимпиады".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". "Треугольная история". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Пока станица спит".Сериал (12+)
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести. Дежурная часть".
17.45 "Ликвидация". Сериал (12+).
18.40 "Прямой эфир".
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.30 XXII зимние Олимпийские игры. Биатлон. Масс-старт. Женщины.
21.45 "Последняя миссия. Операция в Кабуле".
23.10 XXII зимние Олимпийские игры в Сочи. Прыжки с трамплина. К125. Командное первенство.
01.00 "Девчата". Ток-шоу (16+).
01.40 "Кто поедете в Трускавец".
03.10 "Закон и порядок-19" (16+).
04.00 "Найти и обезвредить. Кроты" (12+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
